ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 февраль (шаҡай)

2019

№5 (839)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә февралдә һәм мартта 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителә. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ. Май айынан хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Ә 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн иһә 18 февралгә тиклем яҙылһағыҙ (дүрт айға - 404,64 һум) гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлаясаҡһығыҙ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Мин йырларға... халҡымдан өйрәндем" 7

Ҡыҙҙарыбыҙ бейегәндә... 8-9

көмөш тәңкә зыңын ишетергә теләр инек

Ҡотолайыҡ... иблис ҡотҡоһонан 11







АФАРИН!

# ЯРЫШТЫЛАР, ЕҢДЕЛӘР!



Конкурс еңеүселәре Зөлфиә Иҫәнбаева һәм Гөлшат Ғәбитова.

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2019" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2019" конкурстарын йомғаҡлау тантанаһы уҙҙы. Һөнәри оҫталыҡ конкурстарында быйыл барлығы 66 педагог ҡатнашҡайны. Уларҙы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова, республиканың төрлө вуз етәкселәре, ғалимдар һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәре тәбрикләне.**

(Дауамы 16-сы биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөлә ҡышын ҡар менән көрәшәбеҙ, йәй етһә, саң бураны, туҙан һәм ҡом, бысраҡтан яфа сигәбеҙ. Был мәсьәләләр һеҙҙе борсоймо?

***Заһир МОРТАЗИН, хеҙмәт ветераны:*** Кеше яҡшыға тиҙ өйрәнә, тиҙәр. Шуны уҡ киреһенсә әйләндереп әйтергә була. Яҡшыға ғына түгел, яманға ла өйрәнәһең икән, хатта шул шарттарҙа йәшәй торғас, яман, етешһеҙ яҡтарҙы күрмәй ҙә башлайһың. Мәҫәлән, ошоға тиклем баш ҡалабыҙҙың таҙалыҡ торошона әллә ни дәғүәләр ишетелмәне, киреһенсә, ҡайһы бер гәзиттәрҙә йыш ҡына "ҡалабыҙ урамдары таҙа" тигән ҡараш йәшәп килде. Асыҡланыуынса, таҙалыҡ төшөнсәһенә ҡайһы яҡлап ҡарайһың бит. Беҙҙең өсөн таҙа - тимәк, урам буйында сүп-сар аунап ятмай. Ҡайһы бер уңған урам һепереүселәр көҙ көнө хатта һарғайып ҡойолған япраҡтарҙы ла һепереп түкте. Тик бына шул саҡ улар һеперткеһенән күтәрелгән саң-туҙанға иғтибар иттекме икән? Юҡ, ә ошо тирәнән шәберәк атлап, үтеп китергә ашыҡтыҡ. Иғтибар менәнерәк ҡараһаң, әллә ни таҙа тип тә әйтеп булмай икән ҡала урамдарын. Эш ниҙә һуң? Бер осор офисыбыҙҙың ишек төбөнә еүеш сепрәктәр түшәп ҡуя башланылар, сөнки, инде ҡыш булыуға ҡарамаҫтан, аяҡ кейемдәренә әллә күпме бысраҡ эйәреп инә. Баҡтиһәң, көн һыуытып, боҙлауыҡ башланһа, коммуналь хеҙмәт эшселәре тротуарҙарға ваҡ ҡырсынташ, ҡом һибә. Тик бына ниндәй ҡом ул? Беҙ күрмәһәк тә, уны күреүсе булды, ниһайәт. "Бөгөн кәңәшмәгә Октябрь проспекты буйлап килдем: юл буйҙарында 10 сантиметрлап ҡалынлыҡта бысраҡ тупланған. Үҙ күҙҙәремә ышанмай торҙом. Өфө - матур, ләкин бигерәк бысраҡ ҡала... Әйтерһең дә, юлға ҡом түгел, ә ҡара тупраҡ һибәләр. Ҡот оскос батҡаҡ. Тайғаҡта юлдарға һибә торған состав тәүҙә эре-төрө тупраҡ киҫәктәренән таҙартылырға, йыуылырға тейеш. Был мәсьәләгә иғтибар итергә кәрәк, - тине республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров ҡала башлығына мөрәжәғәт итеп. - Уны ҡайҙан һатып алғандарын тикшерергә кәрәк. Автобустар, әйтерһең дә, ауыл урамдары буйлап йөрөй: ҡайҙан шул тиклем батҡаҡ - ҡала урамынан йөрөйҙәр бит. Унан яҙ, йәй башланһа, ҡаланы саң баҫа, был йәмһеҙ күренеш кенә түгел, ә балаларҙың сирләүенә лә сәбәп. Бындай маҡсаттарға Өфөгә бысраҡ ҡом ебәреп, таҙаһы коммерция структураларға китә, тиһәләр ҙә ғәжәп булмаҫ..."

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, шулай итеп, ҡала халҡы ошоға тиклем әллә ни иғтибар итеп еткермәгән мөһим мәсьәләне күтәрҙе һәм Өфө - матур ҡала, ләкин бысраҡ, тине һәм уның сәбәбен ҡала төҙөлөшө мәсьәләләренә дөрөҫ мөнәсәбәт булмауҙа күреүен әйтте.**

Ҡаланы төҙөкләндереү буйынса ул Мәскәүҙең ҡала уңайлыҡтары кимәлен миҫалға килтерҙе: "Кутузов проспектында йәй көнө аҡ нәскиҙәрҙә йөрөрлөк". Ҡала властарын ул бына шундай кимәлдән өлгө алырға саҡырҙы. Бына ошо һөйләшеү ниндәйҙер өмөт уята: бәлки, ысынлап та, яҙлы-көҙлө һәм йәйен саң-туҙанға, бысраҡҡа батыуҙан ҡотолор Өфөбеҙ?

(Дауамы 3-сө биттә).

12+




ТУН АЛЫП ҠАЛЫҒЫҘ!

**Өфөлә 5 кенә көн, 6-10 февралдә, "Өфө-Арена"ла "Тун алып ҡалығыҙ!" тип аталған Новоторжский йәрминкәһе эшләйәсәк.** Был Рәсәйҙәге эре етештереүселәрҙең береһе һәм ҙур натураль тундар сауҙа-күргәҙмәһе. Тундарҙың 42-нән 60-ҡа тиклемге бөтә үлсәмдәре бар.

**Хаҡтар отошло, ташламалар, бүләктәр күтә!**
Ҡиммәтле тиренән тегелгән баш кейемдәре – 7 меңдән алып.
Һарыҡ һәм ҡондоҙ тиреләренән йылы тундар – 13-49 меңлек.
Ҡаракүл – 80 меңдән алып.
Шәшке тундар – 79-290 меңлек.

Пенсионерҙар өсөн тундарға 5 % ташлама яһала, тик кассала пенсионер таныҡлығын күрһәтергә кәрәк буласаҡ.**

Тундар ГОСТ талабына ярашлы тегелгән. Гарантия - ике йылға тиклем. Тауар күтәсәккә һәм кредитҡа ла бирелә. *

Арттырып түләү 0%

**Тун алырға рәхим итегеҙ!**
**6-10 февраль, 2019**, шаршамбы-йәкшәмбе.
"Өфө-Арена", 10.00 – 19.00 сәғәттәрҙә.
Өфө, Ленин урамы, 114

www.shubu.ru
8 (800) 222 63 92
(шылтыратыу бушлай).

*күтәсәккә, кредит ООО"РусфинансБанк", лиц.ЦБ РФ №1792(13.02.2013)

БЫНАҒАЙЫШ!

**Илдә коррупцияға ҡаршы көрәш ҡыҙып та өлгөрмәне, аренала ниндәйҙер "ҡаршы тороп булмай торған көс" пәйҙә булды. Ошо көс коррупцияға ҡаршы тороу маҡсатында ҡулланылыусы ҡайһы бер тыйыуҙарҙы, сикләүҙәрҙе һәм талаптарҙы боҙған сүрәттә лә бәғзе граждандарҙы яуаплылыҡтан ҡотҡара һәм ул хоҡуҡ боҙған тип иҫәпләнмәйәсәк, имеш.**

# ЗАКОН ПЛАСТИЛИН ТҮГЕЛ

Рәсәй Юстиция министрлығы Хеҙмәт, Эске эштәр министрлыҡтары менән берлектә, Генераль прокуратура һәм Рәсәй Тикшеренеүҙәр комитеты ҡатнашлығында, Рәсәй Хөкүмәте аппараты ҡушыуы буйынса, "Коррупцияға ҡаршы көрәш тураһында"ғы федераль законға һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа закон акттарына әлеге "ҡаршы тороп булмай торған көс" һәм уның эҙемтәләре хаҡында үҙгәрештәр индереү буйынса мәсьәлә ҡуҙғата. Был турала аңлатма документта әйтелеүенсә, "ҡайһы бер осраҡтарҙа коррупцияға ҡаршы булдырылған сикләүҙәр һәм тыйыуҙарҙы үтәү, мәнфәғәттәр конфликтын иҫкәртеү йә булдырмау объектив сәбәптәр арҡаһында мөмкин булмай сыға", ләкин ошоға тиклем был хаҡта законда бер ни ҙә әйтелмәгән була, әле Юстиция министрлығында уға бер ни тиклем "аныҡлыҡ" индерелә: йәғни хәлде тикшереү барышында әлеге "объектив сәбәптәр" килеп сыҡһа, ул коррупция булып иҫәпләнмәй. Юстиция министрлығының теүәл генә формулировкаһы булмаған ошондайыраҡ икеле-микеле аңлатмаларын тәржемә итеүе лә хатта ситенерәк, нимәлер килешеп етмәгән кеүек. Дөрөҫөрәге, тел әйләнмәй һәм шундай тойғо ҡала: күрәһең, коррупция ысынлап та "ҡаршы тороп булмай торған көс"кә әйләнгән инде Рәсәйҙә; ул хатта ки иҡтисад нигеҙен тәшкил итеп торған таштарҙың береһенә әүерелгән, шуға ла был йәһәттән тоталь еңәйәтселекте бер аҙ "аҡлау, ағартыу", йә булмаһа, донъя йәмәғәтселеге алдында Рәсәйҙең коррупция буйынса статистикаһын "тәртипкә килтереү", бер аҙ "косметика" талап ителәлер, күрәһең. Башҡаса был инициативаны нисек аңларға? Бынан алдараҡ Рәсәйҙең Баш прокуратураһы коррупцион еңәйәттәрҙең йылдан-йыл арта барыуы, 2018 йылда 9 ай эсендә (ғинуар-октябрь) 3 171 ришүәтселек осрағы теркәлеп, коррупция үҫеше 2017 йылдағыһына ҡарағанда 9,4 процентҡа артыуы хаҡында статистика килтергәйне. Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәктәре мәғлүмәттәре буйынса ла күңел йыуатырлыҡ хәбәр юҡ. Рәсәйҙәр фекеренсә, коррупция иң ныҡ тамыр ебәргән өлкәләр тип медицина, ЮХХДИ һәм полиция, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, суд системаһы һәм прокуратура күрһәтелә. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың сирек өлөшө "бөтөн йәмғиәт ришүәтселеккә батҡан" тип иҫәпләй. Әйткәндәй, РФ Иҫәп палатаһы етәксеһе, элекке финанс министры Алексей Кудрин да шундай фекерҙә. Яңыраҡ "Коммерсант" гәзитенә биргән интервьюһында әйтеүенсә, Рәсәйҙә дәүләт аҡсаһын рәхәтләнеп урлайҙар. Был бәләгә юлды ябыу өсөн, тигән фекерҙә ул, Рәсәйҙә "сәйәси һәм милли институт тәрҙәре" етешмәй. Бөтә нәмә, шул иҫәптән һүҙ азатлығы ла, коррупцияға ҡаршы көрәшкә йүнәлтелергә тейеш, тип иҫәпләй А.Кудрин. Ләкин Рәсәй Хөкүмәте күрһәтмәһе буйынса коррупцияға ҡаршы көрәш тураһындағы законға үҙгәрештәр проекты әҙерләү факты бөтөнләй икенсене һөйләй түгелме? Беҙҙә генә закондар ана шулай "пластилиндан" яһала, буғай: аҙаҡ кемгә нисек кәрәк, шулай итеп әүәләй ҙә алалар...

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА.**

БЫЛ АЙҘА...

# ШАҠАЙҘЫҢ ШАНЛЫ КӨНДӘРЕ

**Шаҡай ҡыштың һуңғы айы иҫәпләнеүгә ҡарамаҫтан, еңел генә бирешергә теләмәй: әсе еле, һепертмә бурандары менән бар көсөнә тартҡылаша торған гәҙәте бар. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ҙа мул ғына яуып ташлай, бейек көрттәр өйөлә. Ярай әле, көндәре һанаулы: быйыл ни бары 28, юғиһә, селләлә һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем, тип әйткән була, ти бит. Кем белә, кәбисә йылы (шаҡай дүрт йыл һайын тип әйтерлек 29 көндән килә) шулай ҙа итеп ҡуйыр әле. Киләһе 2020 йыл тап ана шундай кәбисә йылы буласаҡ. Халыҡта ундай йылдарҙы именлек, сәләмәтлек, уңыш йыйып алыу мәсьәләләре йәһәтенән хәүефләнеберәк ҡаршылау ғәҙәте булһа ла, тормошҡа айыҡ, позитив ҡараусылар бындай ырымға ышанмаҫҡа саҡыра.**



Ай календары Рәсәйҙең хәрби дан көнө - Сталинград һуғышында фашист ғәскәрҙәрен ҡыйратҡан көн (2) менән башланып китә. Был дата Бөйөк Ватан һуғышында ғына түгел, ә тотош Икенсе бөтә донъя һуғышы барышында ла төп һынылыш була. Дошман төп көсөн Сталинградты ҡыйратыуға йүнәлтә, сөнки ошо фронтта оборонаны өҙөп, Уралға ынтылмаҡсы һәм артабан Кавказды ҡулға төшөрмәксе була. Ләкин көс һәм хәрби техника йәһәтенән өҫтөнлөккә эйә фашистар көтөлмәгән ҡаршылыҡҡа осрай: Сталинградты һаҡлаусы совет һалдаттары һәм халыҡ ополчениеһы көстәре ҡаланы һаҡлауға тере крепость булып баҫа. 200 көн һәм 200 төнгә һуҙылған был үлемесле алышта 1,5 млн немец һалдаты юҡ ителә, 100 меңдән ашыуы, шул иҫәптән фельдмаршал Паулюс тотош армияһы менән әсир төшә. Советтар Союзы яғынан 1,3 млн кеше ҡорбан була. Немецтар Сталинградты көн-төн утҡа тота: 1 млн бомба ташлай, 700-ләп танк менән ябырыла - шулай итеп, ҡаланы тулыһынса харабаға әйләндерә. Дошман ҡала урамдарына бәреп ингән хәлдә лә хатта Сталинградты һаҡлаусылар сигенмәй, ҡаланы талап ҡасмай, киреһенсә, трактор заводында танк артынан танктар эшләп сығарыуҙы дауам итә. Дошман тар-мар ителгәндән һуң ныҡлығы, бығаса күрелмәгән ҡаһарманлыҡ өлгөһө өсөн "ҡорос ҡала" исемен алған Сталинградты һаҡлап ҡалыуҙа, аҙаҡ емереклектәрҙән таҙартып, аяҡҡа баҫтырыуҙа бөтөн ил, шул иҫәптән Башҡортостан да яҡындан ҡатнаша: 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы, 214-се уҡсылар дивизияһы, 124-се айырым уҡсылар бригадаһы, башҡа частәрҙә хеҙмәт итеүсе Башҡортостан һуғышсылары ошонда хәрби сынығыу ала. Уларҙан ҡала беҙҙең республиканан бында эшелондарға тейәлеп, тыл эшсәндәре ағыла. 1943 йылдың майында Өфө тимер юл вокзалынан 700-ләгән комсомол ағзаһы һәм йәштәр үҙҙәре теләп Сталинградҡа ярҙамға ашыға. Был иҫтәлекле көнгә ҡарата, Рәсәйҙең хәрби данын булдырыуҙа - ул ниндәй генә датаға ҡағылмаһын - Башҡортостандың фиҙаҡәрлеге лә ярылып ята, тип әйтергә кәрәк. Әйткәндәй, ҡайҙа әлеге фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ, түҙемлек сифаттары кәрәк, башҡорттар һаман да шунда. Париждарҙы яулаған ата-бабаларыбыҙҙың хәрби данын, шөкөр, онотҡаныбыҙ юҡ. Ул йылдар шаны бөгөн дә хәтер түребеҙҙә: китаптар, мәҡәләләр яҙыла, был йәһәттән архив кәштәләренә лә саң ҡунғаны юҡ. Ләкин заманына күрә заңы башҡаланыбыраҡ китһә лә, Рәсәй данын ишәйтеүҙән туҡтамаһы башҡорт ир-егете. Халҡыбыҙзың йөрәк яраһына әүерелгән Афған һуғышына ла, Чечня ғәрәсәтенә лә күпләп башҡорт егеттәре алынды. Шуларҙың байтағы тыуған иленә цинк табуттарҙа ғына әйләнеп ҡайта алды. Ул замандағы ил етәкселәренең кеше ғүмеренә үҙҙәренең ҡаҡшаған абруй һәм амбицияларын хәл итеүсе хәрби ресурс сифатында ғына ҡарауы арҡаһында йәш ғүмерҙәр өҙөлдө, әсә йөрәктәрен бөтмәҫ ҡайғы өттө... Шаҡайҙа совет һалдаттарының Афғанстандан сығарылыуына 30 йыл (15) тула. 1979 йылдан 1989 йылға тиклем ун йылға һуҙылған афған һуғышына Башҡортостандан 9,5 мең һалдат һәм офицер саҡырыла, шуларҙың 343-ө һәләк була. Ә күпмеһе яраланып, контузияланып, өҫтәүенә, дошмандың ҡот оскос вәхшилегенең шаһиты булыуҙан психик травмалар алып ҡайта. Уларҙың иһә бөтәһенең дә артабанғы яҙмышы шыма ғына килеп сыҡмауы ла сер түгел. 19-20 йәшлек кенә ябай һалдаттар "бысаҡ йөҙөнән" йөрөп, үҙҙәрен үлемесле

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Киләһе йылда Сибай ҡалаһының "Хеҙмәт" стадионында реконструкция башлана, уның барышында яңы футбол майҙансығын төҙөү ҡуҙаллана. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Сибайға эш сәфәре барышында 2020 йылда стадионды төҙекләндереүгә тотоноу өсөн ағымдағы йылда бөтә әҙерлек эштәрен тамамларға ҡушты. "Иң мөһиме, балаларға бында йөрөүе уңайлы, транспорт та булырға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

✓ Башҡортостандың 10 ҡалаһы һәм муниципалитетынан 58 спорт мәктәбенә республика ҡаҙнаһынан субсидия бирелә. Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан Хөкүмәте президиумы ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Республика бюджетынан бүленгән аҡса иҫәбенә муниципаль районлар һәм ҡала округтары спорттың 28 төрө буйынса республиканың йыйылма командалары ағзаларын әҙерләү һәм тәрбиәләү программаларын тормошҡа ашырасаҡ.

✓ РФ Хөкүмәте етәксеһе Дмитрий Медведев 2019 йылда ҡайһы бер пособиеларҙы һәм компенсацияларҙы индексациялау күләмен раҫлаған ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Индексация ветерандарға, инвалидтарға, балалары булған граждандарға, шулай уҡ производствола бәхетһеҙ осраҡтарҙан һәм һөнәри ауырыуҙарҙан мотлаҡ социаль страховкалаған саҡта түләнгән түләүҙәргә, пособиеларға һәм компенсацияларға ҡағыла.

✓ 2019 йылда республикала, Башҡортостан Башлығын һайлауҙан тыш, 7336 депутат мандатын биләү буйынса 800-ҙән ашыу һайлау кампанияһы көтөлә. Ауыл һәм ҡала биләмәләре советтары составы 100 процентҡа тиерлек алыштырыла. "Берҙәм Рәсәй" муниципаль һайлауҙарға кандидаттарҙы праймериз ваҡытында билдәләйәсәк. Алдан тауыш биреү көнө 26 майға иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем билдәләнгән.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев ошо көндәрҙә йәнә "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе секретары итеп һайланды. Төбәк партия конференцияһындағы 213 делегаттың 168-е уның кандидатураһы өсөн тауыш бирҙе. "Берҙәм рәсәйҙәр" төбәк бүлексәһе сәйәси советының һәм уның президиумының яңы составын да һайланы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Мортаза Рәхимов ысын мәғәнәһендә халыҡ Президенты булды, сөнки уның һөйләгәне эшенән айырылманы. Республика халҡы өс мөҙҙәт рәттән күпселек тауыш менән уға оло ышаныс һәм ихтирам күрһәтеп, Президент итеп һайланы.**



ҡурҡыныска дусар итеүгә ҡарамаҫтан, ғүмерҙәре баһаланмай. "Афған һуғышындағы батырлыҡтары өсөн" тигән билдәләмә менән 86 кешегә Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән һәм шуларҙың 6-һы - генерал, 32-һе капитан һәм майор, 8-е - полковник, 14-е - подполковник, хатта бер маршал да бар. Рядовойҙар ни бары - 5-әү, шуларҙың өсәүһенә юғары исем үлгәндән һуң бирелә... Ә дөрөҫөн генә әйткәндә, был мәхшәрҙән иҫән-имен ҡайтыу һалдат өсөн үҙе иң юғары һәм ҡәҙерле награда булғандыр. Ғүмерҙең бөйөк бер яҙмыш бүләге икәнен улар аңлағандыр, аңлаһа. Ә бына уларҙың замандашы булмаһа ла, тиҫтере - 19 йәшлек кенә Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) күкрәге менән дошман дзотын ҡаплағанда нимә тураһында уйлап өлгөрҙө икән? "Афғандар" кеүек сит-ят ерҙә сит-ят мәнфәғәтен яҡлап түгел, ә тыуған Ватан өсөн ғүмерен биреүҙе ул, моғайын, мәртәбә һанағандыр. Әгәр иҫән булһа, быйыл 95 йәшен (**5**) тултырыр ине, тик беҙҙең өсөн ул һаман да йөрәгенә бөтөн донъяны һыйҙырған 19 йәшлек романтик булып күҙ алдына баҫа...

Әйткәндәй, был айҙа Башҡортостан Республикаһының тәүге Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 85 йәш тула (**7**). 1993 йылдан алып 2010 йылға тиклем ил өсөн ауыр һынау йылдарында суверенитет яулап, яңырыу осорона аяҡ баҫҡан Башҡортостаныбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкселегендә Рәсәйҙең алдынғы төбәктәренең береһенә әйләнде. "Тап шул йылдарҙа Башҡортостаныбыҙҙа быуаттар һуҙымында башҡарылмаған эштәр атҡарылды, юлдар һалынды, ауылдарға газ үткәрелде, мәктәптәр, дауаханалар, шифаханалар, мәҙәниәт һарайҙары, театрҙар төҙөлдө; республикабыҙ һынылыш йылдарын мөмкин тиклем аҙыраҡ тетрәнеү менән үтә алды",- тип яҙғайныҡ инде гәзитебеҙҙә юбилярҙың 80 йәшен билдәләгән көндәрҙә. Иң мөһиме, халыҡтың ике ҡулына шөғөлө булды, бигерәк тә ауылдарҙа, сөнки Мортаза Ғөбәйҙулла улы республикалағы колхоз-совхоздар формаһын һаҡлап алып ҡалды, һәм был бик аҡыллы, халыҡ мәнфәғәтендә эшләүсе аҙым булды. Ә күпме кеше был йылдарҙа торлаҡлы булып һөйөндө һәм Мортаза Ғөбәйҙулла улына бөгөнгө көндә лә шәхсән рәхмәттәрен яуҙырып, ҡыуанып йәшәй! Шамонино тип аталған ауылға шуға ла тәүге Президентыбыҙ исемен биреү дөрөҫ булыр ине. Мортаза Рәхимов ысын мәғәнәһендә халыҡ Президенты булды, сөнки уның һөйләгәне эшенән айырылманы. Тағы шул да бына раҫлай: республика халҡы өс мөҙҙәт рәттән күпселек тауыш менән уға оло ышаныс һәм ихтирам күрһәтеп, Президент итеп һайланы. Шуныһына шөкөр: Мортаза Рәхимов, ниндәй генә заман елдәре иҫкәндә лә - беҙҙең арала: халҡы, Ватаны өсөн изге эштәр башҡарыуҙан туҡтағаны юҡ, афарин, артабан да шулай булһын!

Шаҡай - үҙенсәлекле ай. Холоҡфиғеле ҡырыҫ: һыуығы, бурандары менән шаҡ ҡатырып та ҡуя ҡайсаҡ. Йондоҙнамә юраусылары был айҙа тыуғандарҙы баш бирмәҫ азат тәбиғәтле, тамырынан үҙгәрешкә, көтөлмәгән ҡарарҙарға, гармонияға ынтылыусан шәхестәр булараҡ ҡылыҡһырлай. Минеңсә, был сифаттар, ғөмүмән, ирмен тигән һәр ир-егет холҡона ла хас. Ватанды һаҡлаусылар көнөнөң (**23**) ошо айға тап килеүенә лә бер ишаралыр был, сөнки ватаныбыҙ һаҡсылары булыу менән бер рәттән, ғаиләһе именлеген дә тәьмин итергә бурыслы бит улар. Йәмғәтенең генә түгел, йәмғиәтенең дә таяныс булыр ирмен тигән ир. Февралдә иҫтәлекле даталар байтаҡ. Бөтөн донъя яман шеш сирҙәренә ҡаршы көрәш (**4**), Рәсәй фәне (**8**), Граждандар авиацияһы хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара стоматология (**9**), Ҡышҡы спорт төрҙәре (**10**), Бөтөн донъя ауырыу кеше (**11**), Бөтөн донъя никах агентлығы (**12**), Бөтөн донъя радио (**13**), Компьютерсы, Ғашиҡтар, Китап бүләк итеү (**14**), Интернационалист яугирҙар, Халыҡ-ара яман шеш менән сирле балалар (**15**), Рәсәй студенттар отрядтары, Изге ғәмәл ҡылыу (**17**), Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек (**20**), Халыҡ-ара туған тел (**21**), Ватанды һаҡлаусылар (**23**), Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы (**1992 йылдың 25 феврале**) көндәре билдәләнәсәк.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1 -** медицина фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы, Салауат Юлаев һәм Почет ордендары кавалеры **Марат Аҙнабаевҡа - 80 йәш** (1939).

**5 -** Советтар Союзы Геройы, сығышы менән Учалы районынан **Шакирйән Мөхәмәтйәновтың** тыуыуына - **95 йыл** (1924-1943).

**7 -** дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының тәүге Президенты (1993-2010 йылдар), "Урал" мәрхәмәтлек фонды рәйесе, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы, Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Мортаза Рәхимовҡа - 85 йәш** (1934).

**13 -** Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Суфия Ҡорбанғәлиеваға - 70 йәш** (1949).

**14 -** Советтар Союзы Геройы, генерал-майор **Таһир Кусимовтың тыуыуына - 110 йыл** (1909-1986).

**16 -** мәғрифәтсе, педагог, ғалим **Мирсәлих Биксуриндың тыуыуына - 200 йыл** (1819-1903).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Өфөлә ҡышын ҡар менән көрәшәбеҙ, йәй етһә, саң бураны, туҙан һәм ҡом, бысраҡтан яфа сигәбеҙ. Был мәсьәләләр һеҙҙе борсоймо?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрхәнә МИҢЛЕҒОЛОВА, китапхана хеҙмәткәре:*** Борсомаған ҡайҙа! Әлбиттә, бөтөн борсолдорған мәсьәләләр араһында иң тәүгеләре булмаһа ла, ниндәйҙер кимәлдә барыбер уларҙың бер-береһенә бәйләнештәре бар. Ул коммуналь хеҙмәттәргә тиһеңме, аҙыҡ-түлек, дарыуҙар, башҡа ҡулланыу тауарҙарынамы - хаҡтарҙың туҡтауһыҙ арта барыуы, ә эш хаҡының байтаҡтан бирле бер үк кимәлдә ҡалып килеүе борсой ғына түгел, йәнгә тейә. Аҡса эшләргә, ҡыбырларға, йүгерергә кәрәк. Бының өсөн эшкә йөрөргә, аҙ ғына булһа ла иш янына ҡуш булһын өсөн премияһыҙ тороп ҡалмайым, тиһәң, эшенде яҡшы башҡарырға, һуңламай йөрөргә кәрәк. Тик бына ҡыш көндәре саҡ ҡына ҡар яуып һалһа ла, беҙҙең ҡала транспорты шып туҡтай ҙа ҡуя, оҙон-оҙаҡ тығындар барлыҡҡа килә. Әле теге аҙнаның бурандарында ла бына шулай булды: тығындар иртән 9-10 балға еткән, тинеләр. Етмәһә, Сипайлово биҫтәһенән үҙәккә килеп етеү байтаҡ ваҡытты ала. Ошо ҡар арҡаһында элекке мэр Ялалов күпме әрләнде! Ялалов китеп барҙы, ә ҡар проблемалары ҡалды, сөнки стихия күренеше өсөн, бер уйлаһаң, бер кем дә шәхси яуаплылыҡ йөкмәй алмай. Икенсе яҡтан, коммуналь хеҙмәттәр һәм ҡар таҙартыусы техника, элекке замандағыса, кеше тормаҫтан алда иртә таңдан тороп эшләй башлаһа, юлдар әҙер булыр ине. Ә улар эшкә сыҡҡан халыҡ менән бергә тора ла көрәккә тотона; йыш ҡына юл хәрәкәтен дә тотҡарлайҙар әле.

Беҙгә ҡыйын, тип, ҡары ла яумай тормаҫ, киреһенсә, ул бик кәрәк ҡалаға ла, ауылға ла - яуһын ғына, ә ҡала хакимиәтенең эште ойоштороу һәләте тап ошондай саҡта беленә лә инде. Ҡыш, исмаһам, саңтуҙандан ҡотолоп тораһың, һауа сафланып киткәндәй. Әлбиттә, ҡала транспорты бүлеп сығарған ағыулы газды барыбер һуларға мәжбүрбеҙ, ҡыш ни, йәй ни. Етмәһә, йәй ана шул ҡала машиналары тиҙлегенән улар йөрөгән үҙәк урамдар ситтәренә саң, батҡаҡ, ҡом уҡмашып, бордюрҙарҙы күмеп китә хатта. Шунан ҡоро көндәр етһә, әлеге транспорт еленән күҙ асҡыһыҙ саң ҡойоно күтәрелә. Юл ситендәге тротуарҙан үткәндә, туҙан тын юлына ултыра, күҙгә, танауға тула. Эштән һуң бер-ике туҡталыш булһа ла йәйәү атларға теләк, шулай итеп, организмға файҙа урынына зыян ғына килтерә. Унан, теләйһеңме, юҡмы, нышып тултырылған йәмәғәт транспортында ҡыҫылып, төртөшөп, талашып тигәндәй саҡ ҡайтып йығылаһың инде...

***Руслан ВАРЛАМОВ, блогер:*** Өфөлә йәшәмәһәм дә, уны күптән килеп күрергә теләгем бар ине, сөнки унда минең яҡын дуҫтарым йәшәй; улар мине уңайы сыҡҡан һайын Башҡортостандың баш ҡалаһына саҡыра. Уларҙың Өфө хаҡында фантазияны әсир итерлек мауыҡтырғыс һүрәтләмәләре, ҡыҙыҡтырырлыҡ хикәйәләүҙәре, ниһайәт, мине үҙемдең йәшәп ятҡан ҡаламдан ҡуҙғатып, Өфөгә юлланырға мәжбүр итте. Самолетҡа билет һатып алғанда, әйтерһең дә, икенсе бер илгә осам кеүек тойолдо, сөнки шул тиклем күпте көтә инем был сәфәрҙән: дуҫтарым һүҙе менән әйткәндә, "бындай һуш китерлек" ҡаланың Рәсәйҙә урынлашыуы мөмкин булмаған хәл тойолдо. Һәм йәшермәйем: көткәнем алдыма килде, тик ... тап киреһенсә. Өфө урамдары буйлап 15-20 минут йөрөгәндән һуң минең өҫ-башым мал һарайынан килеп сыҡҡан кешенекенә оҡшаш ине. Аяҡ кейемем батҡаҡҡа буялып, салбар балаҡтарына тубыҡҡа тиклем бысраҡ сәсрәп бөткәйне. Бәлки, яҙғы көн, ҡар ирегән мәл булғанғалыр? Тик үҙем йәшәгән ҡалала ла ошондай уҡ яҙ булып ҡалғайны, унда минең менән бындай хәл булғаны юҡ. Яҙ осоро борондан килгән ғәҙәт буйынса Рәсәйҙең күп ҡалаларында ла бысраҡ инде ул, ләкин Өфөлә - айырыуса, тип әйтер инем. Етмәһә, светофорҙың йәшел уты янғанды көтөп торғанда тиҙерәк үтеп ҡалырға ашығыусы бер машина мине баштан-аяҡ бысраҡҡа ҡойондороп китте. Бында, асыҡланыуынса, хатта үҙәк урамдарҙа ла бысранмайынса ғына йөрөү мөмкин түгел икән, сөнки бордюр ситтәренә йыйылған батҡаҡ аша һикереп сығыу ҙа хатта ҡотҡармай. Ә урамдарҙағы соҡор-саҡыр, ҙур-ҙур күләүектәрҙе урап сығам, тиһәң, акробат етеҙлеге күрһәтеп, бордюр буйлап та йүгерәатлай китергә тура килә. Ҡаланың Сипайлово тип аталған бер микрорайонына ҡунаҡҡа барып, ҙур күләүектәр эсендә ултырған йорттарҙы күреү ҙә ғәжәп тойолдо: подъездан тышҡа кәмә менән сығалармы икән? Венециялағы кеүек. Тотош алғанда, Өфөнөң башҡа яҡтарын яманлай ҙа алмайым, дуҫтарым мине ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап йөрөттө, музейҙарға, театрға алып барҙылар, һүҙҙе ҡаланың таҙалығы тураһында башлағайным һәм был йәһәттән тәьҫораттар ҡәнәғәтләнерлек булды, тип һис кенә лә әйтә алмайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан муниципалитеттары сайттарында 2024 йылға тиклем подъездарын ремонтлау ҡаралған күп фатирлы йорттарҙың исемлеге бар. Йыл һайын 4 меңгә яҡын подъезды ремонтлау күҙаллана. 2019-2024 йылдарҙа бөтәһе 26 мең подъезд төҙөкләндереләсәк. Программаны тормошҡа ашырыу осорона финанслау 6 миллиард һум самаһы тәшкил итә. Ошо сумманың 1 миллиард һумға яҡыны 2019 йылда подъездарҙы ремонтлауға йүнәлтелә.

✓ Быйыл Башҡортостандың ауыл хужалығы предприятиелары 40 миллиард һумғаса - 2018 йылға ҡарағанда (22 миллиард) ике тапҡырға тиерлек күберәк льготалы кредит йәлеп итергә ниәтләй. Ауыл хужалығы министрлығы иҫәпләүҙәре буйынса, ағымдағы сәсеү кампанияһын уҙғарыуға төбәккә яҡынса 11 миллиард һум кәрәк, был сумманың яртыһынан ашыуы заем аҡсаһы. Былтыр сәсеү һәм урып йыйыу кампанияларын үткәреүгә, мал аҙығын әҙерләүгә сығымдар 15,4 миллиард һумға баһаланды, шунын 9 миллиарды заем аҡсаһы ине.

✓ Африкалағы Буркина-Фасо дәүләтенең Уагадугу ҡалаһында халыҡ-ара шашкалар буйынса Донъя кубогының яңы миҙгелен асҡан "Ouagadougou Open" интернациональ турниры тамамланды. Бында "Башҡортостан" үҙәк шашка клубы спортсылары уңышлы сығыш яһаны. Айнур Шәйбәков икенсе урынды алды, ҡатын-ҡыҙҙар араһында Тамара Танһыҡҡужина еңеү яуланы, икенсе урында - Айгөл Иҙрисова.

✓ Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры төҙөкләндереүгә әҙерләнә. "Быйыл театр 2019-2024 йылдарҙа "Мәҙәниәт" милли проектына инеү өсөн документтар йыя һәм архитектура проектын әҙерләй", - тип хәбәр итте театр етәксеһе Альберт Имаметдинов. Уның һүҙҙәренсә, 1976 йылда һалынған Өфө ҡурсаҡ театры физик яҡтан да, мораль яҡтан да иҫкергән. Дүрт тиҫтә йылдан ашыу инде бинаға бер тапҡыр ҙа капиталь ремонт эшләнмәгән, йыһаздар 80 процентҡа иҫкергән.

✓ Халыҡтан "сүп-сар реформаһы" буйынса мөрәжәғәттәр ҡабул итеү өсөн "ҡыҙыу элемтә" асылды, тип хәбәр итә Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының матбуғат хеҙмәте. Рәсәйҙә йәшәгән һәр кемгә 8-800-555-97-76 номерына бушлай шылтыратып, ошо темаға ҡағылышлы мәғлүмәт ҡалдырырға мөмкин. Мәғлүмәт йыйыу йомғаҡтары буйынса "халыҡ доклады" төҙөлә.

**“БАШИНФОРМ”
материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Был афәт халыҡтың эшләү һәләтенә һәм ғүмеренә, ғаилә именлегенә ҙур хәүеф менән янай. Халҡыбыҙға ҡарата геноцидты туҡтатырға кәрәк, быны башҡаса атап булмай..." - тине Радий Хәбиров.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БАЛАҒА - ПОСОБИЕ

**Башҡортостан тәүге балаһы тыуған ғаиләләргә түләү өсөн федераль бюджеттан 2,6 миллиард һум аҡса ала, тип хәбәр итә республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы.**

Шулай уҡ өсөнсө һәм артабанғы балаларға айлыҡ пособиелар түләү маҡсатында 2019 йылда ике кимәлдәге бюджеттан 752 миллион һум бүленде (650 миллионы - федераль ҡаҙнанан, 102 миллионы - республиканан). Беренсе бала тыуғанда айлыҡ түләү быйыл 9182 һум тәшкил итә (2018 йылда 8892 һум ине). Ул ғаиләнең уртаса килеме уның һәр ағзаһына 14 328 һум булған осраҡта тәғәйенләнә (2018 йылда -14 247 һум) һәм бала йәш ярымға еткәнсе түләнә. Быйыл тыуған өсөнсө һәм артабанғы бала өсөн айлыҡ аҡсалата түләүҙең күләме элеккесә ҡала - 8993 һум, пособие өс йәшкәсә түләнә. Түләүгә йән башына уртаса килеме 8975 һумдан артмаған ишле ғаиләләр хоҡуҡлы (әлеге мәлдә республикала балалар өсөн билдәләнгән йәшәү минимумы дәүмәле шундай). 2019 йылдың 1 ғинуарына мәғлүмәттәр буйынса, республикала 5 709 ғаилә 2018 йылда тыуған йәки балалыҡҡа алынған беренсе бала өсөн пособие юлланы. Әле төбәктә 5 меңдән ашыу ғаилә 2018 йылда өсөнсө йәки артабанғы булып тыуған балалар өсөн пособие ала.

## БАҠСАНДА ЙОРТ ТӨҘӨ

**2017 йылда ҡабул ителгән "Граждандар тарафынан үҙ мохтажлығы өсөн баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек менән шөғөлләнеү һәм Рәсәй Федерацияһының ҡайһы бер айырым закондар актына үҙгәрештәр индереү" тураһындағы Федераль закон үҙ көсөнә инде.**

Әлеге закон нигеҙендә Рәсәйҙәге "дача ер биләмәһе" билдәләмәһе үҙ көсөн юғалтты һәм ҡануниәттә ерҙе ҡулланыуҙың ике төрө - баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек - ҡалды. Яңы закондың ғиләһе шунда. Баҡсасылыҡ өсөн тәғәйенләнгән ер биләмәһендә торлаҡ һәм баҡса йорттары, гараж һәм хужалыҡ ҡаралтылары төҙөргә мөмкин. Бында капиталь төҙөлеш, йәғни нигеҙе булған объекттар тураһында һүҙ бара. Былдай объекттарҙы граждандар үҙ исемдәренә рәсмиләштерә ала. Йәшелсәлек менән шөғөлләнеү өсөн тәғәйенләнгән ер биләмәһендә күсемһеҙ милек исемлегенә инмәгән хужалыҡ ҡаралтыларын төҙөргә була. Унда төрлө ауыл хужалығы эштәре өсөн тәғәйенләнгән һәм башҡа ҡоралдарҙы, шулай уҡ йәшелсә-емеш һаҡларға мөмкин. Уларҙы рәсмилләштереп булмай. Әлегә тиклем шәхси торлаҡ йорт һәм баҡсасылыҡ өсөн тәғәйенләнгән ер биләмәһендә йорт төҙөй башлау хаҡында урындағы хакимиәттә билдәләлеккә ҡуймаҫҡа мөмкин ине. Ләкин ағымдағы йылдың 1 мартынан алып төҙөлөш эштәрен башларға теләү, төҙөкләндереү тураһында уларға иҫкәрмә ебәрергә кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ төҙөлөш эштәренең тамамланыуы тураһында ла улар хәбәрҙар булырға тейеш.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## БЕРЕНСЕ ПРЕЗИДЕНТТЫҢ ЮБИЛЕЙЫ ЕТӘ

**Был аҙнала республика етәксеһе Радий Хәбиров Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов менән осрашты. Был хаҡта "Башинформ"ға Хәбиров янындағы сығанаҡ хәбәр итте һәм бер үк ваҡытта Рәхимов даирәһендәге икенсе сығанаҡ раҫланы.**



Радий Хәбиров Мортаза Рәхимовтың яҡынлашып килгән 85 йәшлек юбилейын республика кимәлендә киң билдәләргә, ошо уңайҙан "Торатау" конгресс-холында башҡорт эстрадаһы йондоҙҙарының сығыштары менән ҙур юбилей концертын, "Башҡортостандың беренсе Президенты" фотокүргәҙмәһен ойоштороорға тәҡдим итте. Ләкин юбиляр ошондай хәстәрлек һәм иғтибар өсөн рәхмәт әйтеп, тантананан баш тартты. Башҡортостандың беренсе Президенты фекеренсә, хәҙер байрам ойоштороу өсөн уңай ваҡыт түгел, республикала тиҙ арала йыйылған проблемаларҙы хәл итергә кәрәк. Өҫтәүенә, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Радий Хәбировҡа Сибай карьерында янғын эҙемтәләрен бөтөрөү эшендә уңыштар теләне, ҡалала йәшәүселәр ҙә республика етәксеһенә һәр яҡлап ярҙам күрһәтер һәм артабан бергәләп - власть һәм йәмғиәт - Урал арьяғында тәртип урынлаштырыр, экология, шулай уҡ бик күп элекке социаль проблемаларҙы хәл итер, тигән ышаныс белдерҙе. Мортаза Рәхимов Хәбировтың ҡотлау открыткаһына һәм республика киң мәғлүмәт саралырында йылы ҡотлау һүҙҙәренә ихлас шат буласағын әйтеп үтте.

## СИБАЙ ХӘЛДӘРЕ

**20 мартҡа Сибай карьеры шахталарына һыу тултырылырға тейеш, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Сибайға эш сәфәре барышында.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡала һәм Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы етәкселеге карьерҙа ут сығанаҡтарын бөтөрөү өсөн карьерға һыу тултырырға ҡарар итте. Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы директоры Йәүҙәт Биккинов һүҙҙәренсә, эштәр 1 февралдә башлана, һыу тултырыу процессы бик мөһим һәм техник яҡтан ҡатмарлы. "410 мең кубометрға һыу тултырырға кәрәк, көн һайын 10 мең кубометр ғына биреү мөмкинлеге бар. Быға 1,5-2 ай талап ителә", - тине ул. Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты планына ярашлы, һыу биреү 8 февралдә башлана, ошо ваҡытҡа техник быуа әҙер булырға тейеш.

"Хәл күпкә ҡатмарлыраҡ булып сыҡты, 1 февралгә эштәрҙе тамамлай алмайбыҙ, әлбиттә, - тип һығымта яһаны Радий Хәбиров. - 20 мартҡа шахта һыу аҫтында ҡалырға тейеш. Ошо ваҡытҡа беҙ һәйбәт һөҙөмтә көтәбеҙ. Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министрлығы Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты менән саралар планын, юл картаһын төҙөй. Һуңынан карьер менән нимә эшләргә кәрәклеген этаплап, аҙымлап хәл итеү, айырым кәңәшмә үткәреү зарур. Комбинаттың эшмәкәрлеге дөрөҫ булыр, тип уйлайым". Радий Хәбиров билдәләүенсә, 1 февралгә тиклем ҡала хакимиәте көсәйтелгән режимда эшләүен дауам итергә, хәлде контролдә тоторға һәм халыҡҡа мәғлүмәт еткерергә тейеш.

## ТОРАТАУҒА СӘЙӘХӘТ

**Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе экспедицияһы республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы указы менән булдырылған Торатау геопаркы сиктәрен билдәләү өсөн Ишембай районында булып ҡайтты.**

Геопарк составына махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре - Торатау менән Йөрәктау, шулай уҡ ике районның башҡа үҙенсәлекле объекттары индерелде. Улар - Ромадановка йырыны, Хажы мәмерйәһе һәм Берғамыт шишмәһе, Егән, Ыласын, Олимпия мәмерйәләре һәм уларҙың тирә-яғы, Туғарсалған күле, Алатау биләмәһе, Эткол һаҙлығы, "Ишембай" дәүләт тәбиғәт заказнигы биләмәһендә урынлашҡан Ҡукрауыҡ шарлауығы, Салауат Юлаев һәм Ташәй мәмерйәләре, Кәлимосҡан ҡаяһы. Сәфәрҙең маҡсаты геопарктың буласаҡ туристик маршруттарын һынау ине. Экспедиция ағзалары ҡаргиҙәрҙә 150 саҡрым ер үтте, маршрут Иҫәкәй, Маҡар, Егән, Ғүмәр, Эткол, Хажы, Һайран, Иҫкесәк, Көҙән ауылдары эргәһенән уҙҙы. "Беренсенән, республикабыҙ ҡомартҡыларының ниндәй хәлдә булыуын, нисек барырға кәрәклеген, майҙансыҡтар бармы икәнен ҡараныҡ, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына экспедиция етәксеһе, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаты Вячеслав Аброщенко. - Район хакимиәте менән осраштыҡ, ғалимдар һәм йәмәғәтселек ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәл үткәрҙек. Был - Рәсәйҙә тәүге геопарк, донъяла ошондай 150 геопарк бар. Уны үҫтереү йәһәтенән байтаҡ эш башҡарыу бурысы тора. Перспективалар аҙ түгел - эш урындары, халыҡ кәсептәрен күрһәтеү. Әлегә план билдәләнек, шуның өҫтөндә эшләйбеҙ".

## БЫЛ ЫСЫН ГЕНОЦИД

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров прокурорҙар алдына сертификаты булмаған алкоголь продукцияһын рөхсәтһеҙ һатыуға ҡаршы көрәште көсәйтеү бурысын ҡуйҙы.**

Республика прокуратураһының киңәйтелгән коллегияһында төбәк етәксеһе уҙған аҙналағы уҡыуҙа ауыл биләмәләре башлыҡтарының ялған алкоголдең һаулыҡҡа ҙур зыян килтереүе хаҡында әсенеп һөйләүен әйтеп үтте. "Был афәт халыҡтың эшләү һәләтенә һәм ғүмеренә, ғаилә именлегенә ҙур хәүеф менән янай. Халҡыбыҙға ҡарата геноцидты туҡтатырға кәрәк, быны башҡаса атап булмай. Прокуратура, көс органдарының контрафактҡа юл ҡуймау буйынса ҡаты саралар әҙерләүен, барлыҡ муниципалитеттарҙа спиртлы эсемлектәр һатыуҙа тәртип урынлаштырыуын һорайым", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе Әбйәлил районын миҫалға килтерҙе. Унда тәүлек әйләнәһенә биш литрлыҡ канистра менән спиртҡа оҡшаған шыйыҡлыҡ һатҡан 248 нөктә асыҡланған. Халыҡ ағыулана, ә өлкәндәр хатта пенсияларын бер ай алдан һалып ҡуя. Башҡортостан прокуроры Андрей Назаров Радий Хәбировтың һүҙҙәрен хупланы һәм ошо йүнәлештәге эште көсәйтеү тураһында күп тапҡыр һүҙ алып барылыуын билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, урындарҙа прокурорҙарға башҡа хоҡуҡ һаҡлау ведомстволарындағы коллегалары менән яҙылып ҡына түгел, ә күҙмә-күҙ ҡарашып һөйләшергә һәм ошо яуызлыҡҡа ҡаршы бергәләп көрәшергә кәрәк.

"БАШИНФОРМ"

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ идаралығына 1 февралгә ҡала майҙандарынан шыршыларҙы алыу һәм барлыҡ боҙ ҡаласыҡтарын емереү бурысы йөкмәтелде. Боҙ ҡаласыҡтарын ваҡытында һүтеү - тәү сиратта ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарының хәүефһеҙлек мәсьәләһе, тип асыҡлыҡ индерҙеләр хакимиәттә. Өфөлә боҙ ҡаласыҡтары ай ярымдан ашыуыраҡ торҙо. Баш ҡала урамдарын яңы йыл иллюминацияһы 14 февралгә тиклем биҙәй, тинеләр мэрияла.

✓Быйыл Өфөлә туғыҙ яңы автобус маршруты асыла. "Мега" сауҙа үҙәктәре селтәренән - Өфө ағас эшкәртеү комбинатына, Көньяҡ автовокзалдан - 4-се бала табыу йортона һәм Белореченск бисҭәһенән Хыял бисҭәһенә тиклем автобустар йөрөйәсәк. Ҡалған алты маршрутта: Йылҡыбай - Федоровка - "Үҙәк" сауҙа комплексы, Жилин - "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәге - 6-сы дауахана, Князев - "УМПО" мәҙәниәт һарайы, Өфө дәүләт нефть техник университеты - Көньяҡ зыярат, Йәйгор - "УМПО" мәҙәниәт һарайы, Йәйгор - Сипайлово.

✓2019 йылдың 1 ғинуарына Өфөлә 150 йәмәғәт транспорты маршруты йөрөй. Был һанды уҙған йылдың октябрендә башланған транспорт реформаһы тамамланғанға тиклем 129-ға тиклем кәметеү күҙаллана. Баш ҡала хакимиәте урынбаҫары һәм транспорт һәм элемтә идаралығы етәксеһе Андрей Федосов һүҙҙәренсә, ҡалала 116 автобус, 22 троллейбус һәм 12 трамвай маршруты ҡалырға тейеш.

✓Өфө биатлонсыһы Антон Бабиков Швейцарияла ил йыйылмаһы составында IBU Кубогы алтынсы этабының ҡатнаш эстафетаһында енеү яуланы. Икенсе урынды Германия йыйылмаһы алды, Норвегия командаһы өсөнсө булып килде,

✓Өфөлә Sheraton Ufa отеле Crowne Plaza Ufa Congress Hotel бренды аҫтында эшләй башлаясаҡ. Отелдә Европаның Crowne Plaza офисы вәкиле эште тамамлай, һуңынан 20 йылға франшиза килешеүе төҙөләргә тейеш. Sheraton Ufa отеле Башҡортостандың баш ҡалаһында 2015-2018 йылдарҙа эшләне һәм Өфөлә "биш йондоҙло" берҙән-бер отель ине. Яңы брендка күсеү февралдә тамамлана.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

***✓ Ундағы йәмәғәт транспорты өлкәһендә урынлаштырылған тәртип тә Өфө өсөн ыңғай миҫал һәм өйрәнелергә тейешле өлгө булып тора. Һәм был мәсьәлә менән баш ҡаланың элекке мэры ла даими шөғөлләнде.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Был аҙналағы оператив кәңәшмә ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафиндың Ҡаҙан ҡалаһына сәфәре һөҙөмтәләре менән таныштырыуҙан башланды. Унда Өфө ҡалаһы вәкилдәре ҡаланың төҙөкләндерелеүе, төҙөлөшө, архитектура биҙәлеше, урамдарҙы яҡтылыҡ сығанаҡтары менән биҙәү, яр буйы ҡаласығы һәм башҡа мәсьәләләр менән таныша.**

# НИҘЕР - УЛАРҘА,

## ниҙер беҙҙә һәйбәт

Ғәҙәттә, ут күрше булып йәшәгән Татарстандың баш ҡалаһы менән сағыштырғанда, Өфө бик күп позицияларҙа артта ҡала, тиергә мөмкин. Әлбиттә, республиканың баш ҡалаһы унын йөҙөн сағылдырып торорға тейеш һәм күршеләребеҙ шул принциптан сығып эш итә лә инде. Һәм был республика Хөкүмәтенең уға ҡарашында, мөнәсәбәтендә лә асыҡ сағыла. Мәҫәлән, Ҡаҙандың йәмәғәт урындарында (парктар, скверҙар, ял зоналары) тәртип булдырыу, уларҙы төҙөкләндереү өсөн федераль, республика һәм ҡала бюджетынан дөйөм алғанда 9 - 9,5 миллиард һум аҡса бүленһә, Өфөгә был сумма тураһында хыялланырға ғына ҡала. Икенсе яҡтан, Яңы йыл иллюминациялары буйынса ла беҙ күпкә ҡалышабыҙ. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров киләһе йылда был мәсьәлә буйынса ҡаҙандарҙы үтеп китергә тейешбеҙ тиһә лә, былтыр ҡыш һуңында баш ҡалабыҙҙың үҙәгендә урамдарҙа уттар булмауын да оноторға ярамай. Яңы йылда балҡып торорбоҙ ҙа ул, әммә унын өсөн энергия менән тәьмин итеүсе ойошма ҡайырып аҡсаһын да алыр. Әгәр республика Хөкүмәте ярҙам булмаһа, был бурысты үтәп сығыу баш ҡаланың үҙенә генә ауырға төшәсәк. Шулай уҡ Татарстанда парк, урман парктары, йәмәғәт кинлеге зоналарын төҙөкләндереү буйынса Президент советнигы вазифаһын булдырыу ҙа күп нәмә хаҡында һөйләй.

Ундағы йәмәғәт транспорты өлкәһендә урынлаштырылған тәртип тә Өфө өсөн ыңғай миҫал һәм өйрәнелергә тейешле өлгө булып тора. Һәм был мәсьәлә менән баш ҡаланың элекке мэры ла даими шөғөлләнде, яңы практикаларҙы Башҡортостанға алып ҡайтыу йөҙөтенән күп эштәр башҡарҙы. Юҡҡа ғына Өфө МАГ-тың тәжрибә алышыу майҙансығы итеп һайланмаған. Был эш электән тормошҡа ашырыла килә, ошо хаҡта ла онотмайыҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә лә башҡаларға өлгө булырҙай ҡаҙаныштар бар. Юҡһа, күрше тауығын ҡаҙҙай итеп күрә лә, сағыштырыуҙарға бирелә лә китәбеҙ... Хәйер, тейешле иғтибар һәм финанслау булһа, ундай "ҡаҙҙар" Башҡортостан ерендә лә бик яҡшы "үҫә" ул...

Шулай уҡ оператив кәңәшмәлә Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың күп фатирлы йорттарҙың подъездарын ремонтлау буйынса йөкмәткән бурысына ла етди иғтибар бүленде. Баш ҡалала быйыл 543 йортта 1600 подъезда ремонт эштәре башҡарылырға, бынын өсөн ошо йорттарҙа йәшәүсе милекселәр менән 15 февралгә тиклем йыйылыштар үткәрелергә, ә ремонт эштәре иһә 1 ноябрҙә тамамланырға тейеш.

Ҡала хакимиәте генә түгел, милекселәр алдында ла торған тағы ла бер мөһим мәсьәлә - ул да булһа ҡулланыусылар һәм энергия ресурстары (йылытыу һәм эҫе һыу) менән тәьмин итеүсе ойошмалар араһында туранан-тура килешеү төҙөп, хеҙмәтләндереү өсөн аралашсыһыҙ түләү мөмкинлеге индерелеүе. Был хаҡта "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең "Теплосбыт" филиалы директоры Ирина Поповаентекләп бәйән итте. Йыл башына ҡулланыусыларҙың "БашРТС"ҡа бурысы 3,5 миллиард һум тәшкил итә, шул иҫәптән 2,5 миллиард һумы (70 процент) - идара итеү ойошмаларыныҡы. Килеп тыуған хәл-торошта аралашсыһыҙ килешеүҙәр төҙөү - ул ҡулланыусылар түләгән аҡсаһының тәғәйен ҡулланылыуы хаҡында белеп торһон һәм түләгән аҡса тәьминәтсегә тулыһынса килеп етһен өсөн эшләнгән алым. Туранан-тура түләүҙәр системаһына күсеү өсөн күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр дөйөм йыйылышта ҡарар ҡабул итергә һәм 10 көн эсендә протоколды тәьминәтсегә, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ һәм төҙөлөш надзоры буйынса дәүләт комитетына ебәрергә тейеш. Икенсе ысул буйынса тәьминәтсе, әгәр идара итеү ойошмаһының йөкләмәлә ҡаралған күләм буйынса ике айлыҡ бурысы булһа йәки бурыс буйынса суд ҡарары сығарылһа, килешеүгә бер яҡлы ғына туҡтата ала. Өсөнсө юл - милекселәрҙең дөйөм йыйылышы ҡарары нигеҙендә идара итеү ысулы үҙгәргән осраҡта коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү һәм улар өсөн түләүҙәрҙең һаҡланыуы. Сығыш яһаусы аңлатыуынса, тура түләүҙәргә күскән хәлдә лә, милекселәр күп фатирлы йорт менән идара итеү өлөшө буйынса идара итеүсе ойошмаһы менән, ә идара итеү ойошмаһы энергия менән тәьмин итеүсе ойошма менән дөйөм милекте ҡарау өлөшөндә генә килешеү төҙөй. Яңы килешеү буйынса "БашРТС" тотош йорт өсөн яуаплы булһа, идара итеүсе компания унын эсендә коммуналь хеҙмәт күрһәтеү өсөн яуаплы, йортта йәшәүселәрҙең ялыуҙарын йыя һәм коммуналь хеҙмәттәрҙе күрһәтеүсе менән бергәләп факттарҙы тикшерә ала. "Тура түләүҙәргә күсеү барышында ҡайһы бер проблемалар ҙа килеп тыуҙы, - ти Ирина Попова. - Төп проблемаларҙың береһе - йылы һыу өсөн тарифтар буйынса билдәләнгән нормативҡа ярашлы түләү. Туранан-тура түләүҙәргә күскәндә идара итеүсе ойошмалар фатирҙарҙың күскән ваҡыттағы беренсе күрһәткестәрен бирә, ә иҫәп-хисап эшләү өсөн иҫәп осороноң һуңғы күрһәткесе кәрәк. Ошо ике күрһәткес булмағанда, иҫәп-хисап фатирҙа теркәлеүселәр һанынан сығып, билдәләнгән норматив буйынса башҡарыла. Граждандар иҫәп приборҙарының күрһәткесен яҙып биреү менән бер ай эсендә ҡайтанан иҫәп-хисап эшләнәсәк. Килешеүҙәрҙе бер яҡлы туҡтатҡанда тағы шундай проблема килеп тыуҙы - бер осорҙа коммуналь хеҙмәттәр ике тапҡыр иҫәпләнгән, ҡулланыусылар ике түләү документы алған, йәғни идара итеүсе компания килешеүҙең туҡтатылыуына күҙ йомоп, ҡулланыусыларға түләү документтары ебәргән. Бөгөнгә был мәсьәлә хәл ителде".

Ошондай күсеү ваҡытында, әлбиттә, аңлашмаусылыҡтар ҙа, һорау тыуҙырған мәсьәләләр ҙә күп була. Шуларҙы күҙ унында тотоп, "БашРТС" клиент офисы аса башлаған. Уның тәүгеһе Һупайлы биҫтәһендә эш башлаған, тиҙҙән Октябрь проспектында ла шундай хеҙмәт асыу күҙаллана.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ИҒЛАН ЭЛМӘ!

**Бөгөн Башҡортостандың ғына түгел, Рәсәйҙең барлыҡ ҡалалары өсөн рөхсәт ителмәгән урындарҙа күпләп реклама иғландары һәм плакаттары йәбештереүҙе иҫкәртеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Реклама биреүселәрҙең үҙ мәғлүмәтен күп урында таратырға тырышыуы ҡаланың йөҙөн бысрата.**

29 ғинуарҙа баш ҡалала рөхсәт ителмәгән урындарҙа реклама иғландары йәбештереүҙе иҫкәртеү буйынса рейд үтте. Тикшереүселәр "Галле ҡалаһы" туҡталышында был эш менән мәшғүл кешене "эләктерҙе". Ошо факт буйынса шунда уҡ административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол тултырылды, хоҡуҡ боҙоусы административ комиссияның ултырышына саҡырылды. Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре тарафынан көн һайын иғландарҙы законһыҙ йәбештереү буйынса мониторинг үткәрелә. Былтыр 5864 протокол төҙөлгән. Хоҡуҡ боҙоуҙың был төрө өсөн граждандарға закон буйынса - 500-1000 һум, вазифалы шәхестәргә - 2000-5000 һум, предприятие-ойошмаларға 10000-15000 һум штраф ҡаралған. Әгәр хоҡуҡ боҙоу икенсе тапҡыр ҡабатланһа, штраф күләме лә арта. Әлеге ваҡытта реклама конструкцияларының өҫтөн рабица сеткаһы менән ҡаплайҙар, был иғландарҙан ҡотолорға ярҙам итһә лә, конструкцияларҙы йәмһеҙләп тора. Шуға күрә ҡала хакимиәте законһыҙ реклама йәбештереү объекты булып хеҙмәт иткән реклама конструкциялары хужаларына, эшҡыуарҙарға фасадтарҙы, подъездарҙы, бағаналарҙы, эскәмйәләрҙе, туҡталыштарҙы махсус һаҡлау саралары ҡулланып һаҡларға тәҡдим итә.

## ӨФӨЛӘ ГЕНӘ ҠАЛДЫ

**2012 йылда республикала барлыҡ һөт кухнялары ябылһа ла, Өфөлә улар һаҡланып ҡала. Ҡала халҡының сабыйҙарҙы ашатыуҙа һөт кухняһының зарурлығын билдәләгән бик күп мөрәжәғәтен иҫәпкә алып, 2014 йылдың декабрендә ҡала Советы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә өҫтәмә ярҙам тураһында ҡарар ҡабул итә. Уны тормошҡа ашырыу ҡала бюджетынан финанслана.**

Әлеге ваҡытта Өфөлә көн һайын аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән 1,3 мең бала буштай һөт, ойотҡан, эремсек ала. Былтыр бер балаға, йәшенә ҡарап, айына уртаса 1127 һумлыҡ 50 порция тура килгән. Балалар ризыҡына талаптар бик юғары. Әле байытылған, үҙенсәлектәре яҡшыртылған 18 төр продукция етештерелә. Сәнәғәттә етештерелгәндәре менән сағыштырғанда, һөт кухнялары продукттары хәүефһеҙлеге ике тапҡырға юғарыраҡ, ҡатмарлы технологик процесс ҡулланылған, сеймалға юғары талаптар ҡуйылған, санитар-гигиена ҡағиҙәләре ҡәтғи үтәлгән ризыҡтар. Ғөмүмән, Үҙәк етештергән продукция 2017 йылда "Башҡортостан продукты" билдәһенә лайыҡ булһа, былтыр ике федераль конкурста ҡатнашып, бихисап алтын миҙалдар яулаған. Продукция өсөн экологик таҙа, сифатлы, юғары сортлы пастеризацияланған һәм урындағы етештереүсенән, әлеге көндә Благовар районынан, һатып алынған һөт кенә файҙаланыла.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Баллы һыу

❖ 1 балғалаҡ балды һыуыҡ һыуға һалып болғатабыҙ. Составы менән ҡандың шыйыҡ өлөшөнә (ҡан плазмаһы) оҡшаған 30 процентлы бал төнәтмәһе килеп сыға. Бал ҡайнамаған һыуҙың төҙөлөшөн үҙгәртә ала. Был унын файҙалы сифаттарын көсәйтә, бал һыуын организм еңел һәм тулыһынса үҙләштерә.

❖ Баллы һыу аш һеңдереүҙе нормаға килтерә. Ашҡаҙан-эсәк трактының бөтөн өлөштәре эшмәкәрлеге яҡшыра.

❖ Иммунитетты нығыта. Хроник ҡурылдай үтә, үпкәләге лайла шыйыҡая һәм сыға (эсәктәр аша).

❖ Ашҡаҙан-эсәк трактындағы паразиттар ҙа һары төҫтө яратмай. Әгәр ҙә уларҙы һары төҫ менән нурландырһаң, улар үрсемәй башлай.

❖ Эсәк таҙара. Баллы һыу эсә башлаған та, бил үлсәме арта, бынан ҡурҡырға ярамай. Ғәҙәттә, эсәктә туплаған һәм ташҡа әйләнгән матдәләр бил тирәһенә туплана. Баллы һыу уларҙы йомшарта һәм организмдан сығара. Дисбактериоз үтә.

❖ Күҙәнәк кимәлендә организм таҙара. Бактерияларға, вирустарға, бәшмәктәргә ҡаршы яҡшы сара.

❖ Әнүрез үтә. Бал һыуҙы йыя, шуға ла бөйөрҙәр һәм бәүел ҡыуығы ял итә.

❖ Дауалау-профилактик сара булараҡ баллы һыуҙы иртән ас ҡарынға эсергә кәрәк. Бер стакан һыуҙы йылап түгел, ҡапыл эсегеҙ. Ул ашҡаҙанда ҡалмай, эскәккә эләгергә тейеш.

❖ Баллы һыу менән бит йыуалар. Ул тирене туҡландыра, йомшарта. Баллы һыу - иң боронғо һәм тәбиғи косметика.

### Йөрәк ауырыуҙарынан

❖ Иртәнге ашта икмәккә бал һылап, унын өҫтөнә корица оно һибеп ашағыҙ. Был ҡан тамырҙарындағы холестерин кимәлен түбәнәйтә һәм инфаркттан һаҡлай. Даими ҡулланһағыҙ, тын алыу еңеләйә, йөрәк мускулы нығый.

### Шәкәр урынына

❖ Балдағы шәкәр файҙалы. Өлкәндәр тигеҙ күләмдә бал һәм корица бутап ашаһа, иғтибарҙары артыр, тәндә еңеллек тойолор.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Беҙҙең ғүмер генә ҡыҫҡа, ә китап ғүмере - мәңгелек, алтынға торошло. "Атайым, яҡшы ғилми китап тапһа, уны тоҡомло юртаҡ хаҡына булһа ла һатып алған", - тип яҙып ҡалдырған Ғабдулла хәҙрәт тураһында улы.***



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**1970 йылдарҙа Археология һәм этнография музейына тирмә кәрәк булғас, Әбйәлил районына мөрәжәғәт иткәйнек. Өлкәндәрҙә уның каркасын яһау технологияһын хәтергә төшөрөү буйынса һорауҙар тыуҙы. Әммә кейеҙ баҫыу бер ауырлыҡ тыуҙырманы, бары тик тейешле күләмдә йөн табыуы ғына ваҡыт алды.**

Фабриканан йөн алып, кәрәкле күләмдә кейеҙ баҫылды. Әле лә был яҡтарҙа кейеҙ баҫалар, ҡайһы берҙә уны туйға тип махсус әҙерләйҙәр. Тап туй йолаһында йөн әйберҙәргә, шул иҫәптән, кейеҙгә лә айырыуса ҡараш һаҡланған.

Кейеҙ (ғәҙәттә, йөн балаҫ менән бергә) бирнәлә була. Ире йортона күсергәндә килендең әйберҙәре һалынған һандыҡты кейеҙ менән ябалар. Йәш килен ултырған арбаға кейеҙ түшәгәндәр. Таулы һәм Урал аръяғының көньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш райондарында киленде биҙәлгән атта һыбай алып ҡайтҡандар. Эйәр аҫтына кейеҙ нигеҙле туй сергеһе һалынған. Төшкән ерендә ҡәйнәһе киленен өйгә индереп, һарыҡ әйтеп, кейеҙ түшәлгән урындыҡҡа ултырырға саҡырған. Был йола "Кейеҙгә ултырыу", "Ҡыҙ урынын күрһәтеү" тип аталған. Ул йәш киленде махсус туй тирмәһенә алып барыуҙы алыштырған.



*Йәйләүгә сығыу. Аттарға биҙәкле туҡыма йәки балаҫ менән тышланған кейеҙ серге һалынған. XX быуат.*

Кейеҙгә бындай мөнәсәбәт Евразияның башҡа күсмәндәрендә лә булған. С. Толыбеков ҡаҙаҡтарҙың йыраҡ юл алдынан аҡ кейеҙгә ултырыу йолаһын, шулай уҡ киленде кейеҙгә ултыртыу йолаһы тураһында яҙа. Был йолаларҙа кейеҙ ҡулланыуҙы ул халыҡтың был материалдың ниндәйҙер көскә эйә булыуына ышаныуҙан килә тип аңлата: "Аҡ кейеҙгә ултыртыу - бәхет теләү". Борон йәш кәләште кейеҙгә ултырһаң, уларҙың ғаиләһе ишле буласаҡ, тигәндәр. Шул уҡ маҡсатта аҡ һарыҡ бүләк ителгән. Әле лә әбйәлилдәр кейәү йортона оҙатылып килгән киленде машинанан аҡ кейеҙгә баҫтырып төшөрә. Тап туй йолаһында ҡулланылыуы ла кейеҙҙең халыҡ көнкүренешендә һаҡланып ҡалыуына булышлыҡ иткәндер ҙә.

Үкенес, кейеҙ әйберҙәрҙе музей шарттарында ла һаҡлауы ауыр. Беҙ үҙ күҙебеҙ күргән кейеҙҙәр XX быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында баҫылған ине. Башҡорт өйҙәрендәге кейеҙҙәр башлыса XX быуаттың урталарында, ҡайһылары 1970 йылдарҙа яһалған. XX быуаттың аҙағына тиклем Башҡортостандың көньяҡ һәм Урал аръяғы райондарында кейеҙ баҫыу традициялары яҡшы һаҡлана. Тупланған материал кейеҙгә һалынған биҙәктәр, уларҙың ҡайһы төбәктеке икәнен асыҡларға ла мөмкинлек бирә.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘЙҘӘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

**Мин йәш түгел инде. Байтаҡ хәл-ваҡиғалар күрҙем, кисерҙем. Дәүеренә ярашлы аң-белемһеҙ ҡалғы ла килмәне. Һәм бөгөнгө кимәл менән сағыштырғанда, беҙҙең быуын ярайһы ғына наҙан булған тигән фекерҙәмен. Мостай ағай әйтмешләй: "Элек шағирмын тип йөрөп яҙған шиғырҙарымды хәҙер уҡыуы ла оят. Ундай йөкмәткеле шиғырҙы бөгөн 5-се класс уҡыусыһы яҙа ала"-, тигәндәй, элекке мәғлүмәт кимәле уғата түбән булған икән шул. Төп сығанаҡ китап ине, "Любите книгу - источник знаний", тигән саҡырыу күп стенаны биҙәне бит ул саҡта...**



# КИТАП УҠЫНЫМ, УҠЫЙЫМ...

Бәләкәй генә ауылда 4 класты тамамлап, район үҙәге Юлдыбайға 5-се класҡа уҡырға барҙым. Класс етәксебеҙ Маһира апай мәктәп китапханаһынан китаптар алып уҡырға ҡушты. Тәүге тапҡыр китапханаға инеп, бәләкәй генә, йоҡа ғына "Мыяубикә" исемле китапты алыуым, китапханасы Менәүәрә апайҙың көләмһөрәп ҡуйыуы хәтеремдә. Минең, һуғыш осоронда уҡый алмайынса, мәктәпкә һуңлап ҡына барған, танау аҫтында йомшаҡ йөндәр күренә башлаған үҫмерҙең ошо кескәйҙәр өсөн тәғәйенләнгән китапты алыуым ысынлап та ҡыҙыҡ тойолғандыр инде. Ул осорҙа дәреслектәргә индерелгән әҫәрҙәрҙең авторҙары, уларҙың ижад емештәре лә үтә ярлы булған. Уны мин әле лә һаҡланған уҡыусы көндәлектәремә күҙ һалғанда тоям. Башҡорт ижадсыларынан М.Ғафури, С.Ҡудаш, Р.Ниғмәти, Ә.Вәли, Ғ.Туҡай биографияларын һәм әҫәрҙәрен уҡығанбыҙ. Ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә күберәк урыҫ әҙиптәрен өйрәнә торғайныҡ. Ысынында, ул осорҙа бит беҙгә туҡтауһыҙ "погибает, башкир, погибает", тип, башҡорт халҡы артта ҡалған, наҙан халыҡ, тик урыҫ ҡына һеҙҙең күҙҙәрҙе асты, тел бирҙе, тип тылҡынылар. Шуға ла күберәген урыҫ телендәге китаптар, йә тәржемә менән баҫылған әҫәрҙәр булды ҡулда.

Шулай ҙа беҙ белемгә ынтылдыҡ. Бер ваҡиға һүҙемде нығыта. 7-се кластабыҙ. Урыҫ теленән дәрестәрҙе Айһылыу апай Рәхмәтуллина алып бара. Апайыбыҙ әҫәрҙе уҡый ҙа, хискә бирелеп, күҙ йәше ағыҙа. Апай әҫәр геройын йәлләп илаһа, беҙ апайҙы йәлләп илағанybыҙ әле лә күҙ алдында.

Китап - ул хис-тойғоға ғына ҡағылмай, ул һине тәрбиәләй. Фадеевтың "Молодая гвардия", Б.Полевойҙың "Повесть о настоящем человеке", П.Вершигорҙың "Люди чистой совести", Н.Островскийҙың "Как закалялась сталь" һәм башҡа ошондай китаптар тәрбиә бирмәнеме ни! Уҡыған китаптан алған донъяуи фәһем, аҡыллы һүҙ мәңгелек юлдашыма әйләнде лә, бөгөн дә минең менән бергә кеүек. Чацкийҙың "И дым отечества нам сладок и приятен", Гоголдең "Мошенник на мошеннике сидит и мошенником погоняет", тигән һүҙҙәре әле лә тере. Бруно Ясенскийҙың "Человек меняет кожу" әҫәрендәге "... бойся равнодушных, они не убивают и не предают, только с молчаливого согласия их на земле существует предательство и убийство" тигәне лә бөгөнгө булмышыбыҙ түгелме? М.Шолоховтың "Тихий Дон"ы донъя күргәс, китапты сират тороп, ярышып уҡыныҡ. Бөгөн ул әҫәрҙе Дон казактарының фажиғәһе тип тә баһалайҙар. Үткән быуаттың 60-сы йылдары башында "Әҙәби Башҡортостан"да баҫылған "Мораҙым" повесын халыҡ шул тиклем бирелеп уҡыны. Беҙ журналды алдыра инек. Ул ауылдаштарҙың оҙон сираты аша үтеп туҙҙы. Шуныһы: Мораҙым төрмәгә эләгеп тәрбиә ала, фронтҡа китә, унда үҙен батыр һуғышсы ғына түгел, бәлки, оҫта ойошторосы итеп тә күрһәтә. Әҫәрҙең дауамы булһын, автор Мораҙымдың һуғыштан ҡайтҡас, хужалыҡты бынамын тигән итеп ойоштороусы, район, республика кимәлендәге етәксегә әүерелеүен һүрәтләһен, тип республика гәзитенә лә яҙҙым. Әммә ул тормошҡа ашманы. Әҫәр авторы тураһында низағтар ҡупты...

Алда яҙыуымса, мәктәп уҡыусыһы булараҡ, беҙ үҙ яҙыусыларыбыҙ булмаған тип инанып, ул осорҙа булған яҙыусыларыбыҙ ижадын ҡат-ҡат өйрәнеп, урыҫтарҙың "Слово о полку Игореве" хикәйәтен иң боронғо әҫәр тип ғәжәпләнер булдыҡ. Үҙебеҙ тураһында белмәнек. Белгертмәнеләр. Хрущев власҡа килеп, золом ҡорбандарын аҡлауға юл асылғас, башҡорттоң да күренекле яҙыусылары, фәһемле әҫәр тыуҙырыусылары булған бит, тип шаҡ ҡаттыҡ. Шулай уҡ "... Мин 23 халыҡ дошманын фаш иттем", тигән документтарҙы уҡып, ул шәхестәрҙе юҡ итеүселәр ҙә булғанын белдек.

Асыштарҙың икенсе тулҡыны - М.Горбачевтың үҙгәртеп ҡороу осоро. Беҙ боронғо булмышыбыҙҙы астыҡ. Башҡорт үтә лә наҙан, булдыҡһыҙ, "дикий" (Ленин һүҙе) булмаған. Урыҫ яҙма ҡомартҡыларынан да күпкә алда Ҡол Ғәлиебеҙ күп яҙма мираҫ ҡалдырған. Ул милли ғорурлыҡ. Тик ул шәхесте ваҡытында ҙурлай алманыҡ, татар туғандар өлгөрләк күрһәтте - уға һәйкәл ҡуйҙы. Беҙ ғорурлыҡтан ҡолаҡ ҡаҡтыҡ, буғай.

...Һуңлап ҡына юғары белем алмаҡ булдым. Бер осор БДУ-ның филология факультетында уҡығандарҙы шаяртып: "Башҡорт теленең нимәһен өйрәнәһең, "һөйкәтәһең" дә, "теркәтәһең" инде", - тигәнем хәтерҙә. Ә телебеҙ үтә лә бай, һутлы, тәрән мәғәнәле булған. Хатам - заманында мәктәптә алған белемем ярлы булыуҙа. Шул замандаштарым тел, әҙәбиәт өлкәһендә бынамын тигән асыштар яһаны, яҙыусылар булып китте - ғорурлыҡ!

Китап - беҙҙең булмыш, рухыбыҙҙы һаҡлаусы, дәлилдәр сығанағы. Мәҫәлән, Сталинды бөгөн төрлө яҡлап тетәбеҙ. Ә уның эш, йәшәү, эшмәкәрлеген Г. Жуковтың "Воспоминания и размышления", Вл. Успенскийҙың "Тайный советник вождя" китаптарында дөрөҫ баһалау бар барыбер. Һүҙ ыңғайында яҙмаҡсымын. Элек әҙәбиәт өлкәһендә өс дәрәжәле премия булдырылды. Береһе Сталин исемендәге ине. Премия Сталиндың гонорары тупланмаһынан булдырылған булған икән. Тағы. Сталин үлгәс, уның шәхси мөлкәтен иҫәпкә алалар: юлбашсының ебәк түгел, ә һалдаттар кейә торған эске кейемдә йөрөгәнен белгәс, барыһы ла шаҡ ҡата. Бөгөн был тирәлә уйланаһылар бар...

"Киске Өфө" оҙаҡ ҡына ваҡыт Й.Бәшировтың "Бөйөк Башҡортостан" исемле хеҙмәтен баҫты. Гәзит биттәрен йыя килдем. Аҙаҡ ишетеүемсә, ул әҫәр китап булып та донъя күргән икән. Бик шәп хеҙмәт. Уның буйынса айырым һөйләшеү булыр, моғайын. Уның сығанаҡтар менән нығытылыуы - хазина! Эйе, китап тик нәфис әҫәрҙән генә тормай. Ниндәй генә йүнәлештә донъя күрмәй улар. Әйтәһе түгел. Әммә "боронғолары" алтынға бәрәбәр.

Мин ғүмерем буйы китап яраттым. Китап ҡулың аҫтында булһа, һине һәр саҡ һаҡлай, яҡлай. Уйланғанда, бәхәсләшкәндә уны ҡулға ала һәм үҙ хәҡиҡәтеңде иҫбатлай алаһың. ТВ-ла "Живая природа"ны ҡараһам, Яныш Картыштың "Думают ли животные" китабына үреләм. Берәр кешенең фиғелен асыҡларға тип, К.Равинскийҙың "Как читать человека", "Звезды и судьбы" китаптарын асам. Ауылдаштар көн, йыл торошо тураһында һорашһалар, "Воемена года: православный народный календарь", йә "Календарь Российского земледельца"ға үреләм. Тәбиғәт биргән дарыуҙарҙы ҡулланыу кәрәкһә, "Лекарственные растения в научной и народной медицине" (Саратов, 1968), "Дикорастущие лекарственные растения Башкирии" (Уфа, 1973), Рим Ахмәдовтың "Одолень трава" китаптарына мөрәжәғәт итәм. Унан тыш мин, ауыл кешеһе булараҡ, мал тотам, баҡса үҫтерәм, бал ҡорттары үрсетәм. Ул тармаҡҡа арналған "Учебник пчеловода"нан күп белешмәләр алам. Ситтәр кәңәшенән тыш булмай. Кәңәштәр - китапта. И.Ф.Заянчковскийҙың "На службе у человека", йә "Твоя родословная, Акбузат" китаптары ҡыҙыҡ та, фәһемле лә. Мәгәр С. Алмазовтың "Прощай и здравствуй, кони" китабы яңынан баҫылһа, йылҡысылыҡ менән ихлас шөғөлләнә башлаған башҡорт өсөн матур ҡулланма булыр ине.

Күпме белешмәләр, һүҙлектәр сығарыла хәҙер. Бөтәһе булмаһа ла, күптәре, шул иҫәптән дини китаптар ҙа кәштәлә. Һирәкләп уларға күҙ һалам. Сүриә вә Сәғүдийәлә баҫылған "Ҡөрән" айырым һаҡлана. "Арабско-русский словарь"-ҙан һүҙҙәр мәғәнәһен асам. Уның 765-се битендә минең исем мәғәнәһен дә табырбыҙ ("йылмаям" тигәнде аңлата). М. Кәрим, Н. Нәжми көндәлектәре һине нисек уйландырмаҫ! Ә Р.Йәнғужин, Ә.Әсфәндийәров, Б.Байышев, Ә.Вәлиди, М.Ҡолшәрипов һәм башҡаларҙың хеҙмәттәре беҙҙең асылыбыҙҙы таныта.

Күп, мәғәнәһеҙ яҙа тип баһаламағыҙ. Китап көн үткәргес түгел, ә фәһем алғыс. М.Ҡаһарманова "Киске Өфө"лә китап уҡыуға ҡағылып, кемдә ниндәй фекер, тип, гәзит уҡыусыларға мөрәжәғәт иткәйне. Әммә уға эйәреп яҙыусылар булманы ниңәлер. Бәлки, мине аңлаусы, эйәреүсе һәм яҡлаусы табылыр.

Беҙҙең ғүмер генә ҡыҫҡа, ә китап ғүмере - мәңгелек, алтынға торошло. "Атайым, яҡшы ғилми китап тапһа, уны тоҡомло юртаҡ хаҡына булһа ла һатып алған", - тип яҙып ҡалдырған Ғабдулла хәҙрәт тураһында улы. А. Пушкин дуҫтары рәтенә ҡуйып, үлер алдынан шкафтағы китаптарына: "Прощайте, мои друзья!", - тигән. Эйе, китап дуҫ та. Дуҫтан айырылыу - хыянат.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**

✓ *Әлмөхәмәтов тәбиғи һәләте, моңло үҙенсәлекле тауышы, музыкаль һәм ишетеү һәләте менән айырылып тора. Етмәһә, көслө ихтыярлы, тырыш була, үҙен йәлләмәйенсә эшләй белә.*



ХӘТЕРКИТАП

# "МИН ЙЫРЛАРҒА...

## халҡымдан өйрәндем"

**2018 йылдың яҙында кинорежиссер Булат Йосопов "Беренсе Республика" тип аталған тулы метрлы тарихи нәфис фильм төшөрә башлағайны. Ул темаһы йәһәтенән "Бабич" фильмының дауамы булараҡ ҡарала. "Беренсе Республика" йәш Башҡортостанда мәҙәни төҙөлөштөң тәүге аҙымдары - драма һәм опера театрҙары, милли әҙәбиәт һәм драматургия, милли опера һәм музыкаға нигеҙ һалыусылар тураһында һөйләй. Фильм әле быға тиклем билдәле булмаған тарихтарҙы аса. "Беренсе Республика" геройҙарының исемен, уларҙың бөйөк эштәрен күптәр белмәй ҙә. Шуға ла "Йәнләндерелгән фоторәсемдәр" тигән проект идеяһы тыуғайны. Фильм геройҙарының тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотоларын һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолованың фильмды төшөрөү майҙансығынан һыҡан фотоларын "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына ла тәҡдим итәбеҙ. Беҙҙең рухиәтебеҙҙә уларҙың үҙ урыны булырға тейеш.**

**Ғәзиз Сәлих улы ӘЛМӨХӘМӘТОВ** (актер Рафиҡ Хәсәнов уйнай) - йырсы, композитор, йәмәғәт эшмәкәре, БАССР-ҙың халыҡ артисы (1929). Ғәзиз Сәлих улының яҙмышы 15 минут эсендә тиерлек хәл ителеп, шунда уҡ тормошҡа ашырылған ваҡытта уға бары 42 йәш була. Әммә ул ошо ҡыҫҡа ғүмере эсендә лә Башҡортостандың мәҙәниәте һәм сәнғәте үҫешенә ҙур өлөш индереп өлгөрә, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ танылыу яулай. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың йырауҫылыҡ сәнғәте оҙон башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыуҙың үрнәгенә әйләнә, мин үҙ туған халҡымдан йырларға өйрәндем, тип яуап бирәсәк ул "Кайҙа уҡыныӊ, кемдән өйрәндең?" тигән һорауға.

Әлмөхәмәтов тәбиғи һәләте, моңло үҙенсәлекле тауышы, музыкаль һәм ишетеү һәләте менән айырылып тора. Етмәһә, көслө ихтыярлы, тырыш була, үҙен йәлләмәйенсә эшләй белә. Башҡорт операһын булдырыу, башҡорт халыҡ йырҙарын таратыу, Мәскәү консерваторияһы эргәһендә башҡорт милли студияһы булдырыу уның ижади һәм ихтимағи-сәйәси тормошоноң маҡсатына әүерелә. Был "беренселәр" мәле, Башҡортостан профессиональ сәнғәтенә нигеҙ һалынған ваҡыт була.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың аяныслы үлеменән һуң оҙаҡ йылдар уның исеме бөтөнләй телгә алынмай. 1957 йылда аҡлана. Тик бынан һуң да йәш быуын башҡорт музыка мәҙәниәтенең иң сағыу вәкиле тураһында белмәй үҫә. Композитор, ғәжәйеп йырсы ошо онотолоуҙан бөртөкләп-бөртөкләп йыйылған мәғлүмәттәр аша арабыҙға "ҡайта". 1968 йылдың ноябрендә башҡорт радиоһы уның тураһында ҙур тапшырыу эшләй (авторҙары Г. Сабитов, Р. Хәйруллин). 1973 йылда музыка белгесе Л. Атанованың "Жизнь как песня" тигән китабы баҫыла. Музыка белгесе Ю. Иҫәнбәт әҙерләгән "Газиз Альмухаметов и Султан Габяши в Казани" тигән китапты (Өфө, "Каданс", 1995) телгә алырға кәрәк. Тарихсы С. Сәйфуллин яңы мәҡәләләр яҙа. Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнап, "Башҡортостан" киностудияһы архив материалдары, замандаштарының хәтирәләре буйынса "Йыр булып ҡайтырмын" (1994) тигән документаль фильм төшөрә. Унда Әлмөхәмәтовтың әҫәрҙәре, үҙенең тауышы яңғырай. 2008 йылда М. Иҙрисова "Газиз Альмухаметов: Статьи. Воспоминания. Документы" тигән китап сығара. Унда тәүгә Әлмөхәмәтовтың музыкаль-әҙәби мираҫына анализ яһала.



*Ғәзиз Әлмөхәмәтов һәм актер Рафиҡ Хәсәнов.*

Ғәзиз Әлмөхәмәтовты композитор булараҡ билдәләгән әҫәрҙәре араһында иң әһәмиәтлеһе "Шомло ел" башҡорт профессиональ музыка сәнғәте тарихында беренсе йыр-баллада була. Уның яҙылыу мәле асыҡланмаған. Башҡортостанға ҡайтҡан арала Ғәзиз Беренсе донъя һәм граждандар һуғышына "эйәреп" килгән емереклек, асыҡ һәм ауыруҙарҙан халыҡтың миктәгәнен күреп йөрөй. Шул рәүешле шағир С. Биксурина һүҙҙәренә матәм йыры барлыҡҡа килә. Фортепиано өсөн көйҙө Василий Виноградов ижад итә. Әҫәрҙең нигеҙендә - бер-береһе менән бәйле ике үҙәк образ: башҡорт фольклорында төп урындарҙы алып торған Урал менән тыуған ил иреклеге өсөн көрәштә шәһит булған герой образы.

1937 йылдың 12 декабрендә йырсы һәм композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡулға алына. Ете оҙон айҙы төрмәлә уҙғара. Ул үҙен иреккә сығарырҙар тип ышана, йырлауын дауам итә, тамағына һалҡын теймәһен өсөн туғандарынан төрмәгә йылы шарф алып килеүҙәрен һорай. Әммә 15 минутлыҡ ҡына суд ултырышы тамамланғас та ҡарар тормошҡа ашырыла. Төп ғәйебе, йәнәһе, "үҙенең концерт программаларына контрреволюцион халыҡ йырҙарын индереүе". Ғәзиз судҡа тиклем дә йырлай. Һуңынан был хәлгә шаһит булыусылар композиторҙың яратҡан йырҙарын - "Урал" һәм "Буранбай"ҙы йырлауын һөйләйәсәк...

Ғ. Әлмөхәмәтов менән бер көндө НКВД органдары билдәле сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, яуаплы вазифалар биләгән шәхестәрҙе ата. Уларҙың ҡайһы берҙәренең генә исемдәрен хәтергә алып китәйек: Риза Әбүбәкеров, Әхмәт Иҫәнсурин, Булат Ишемғолов, Ғәбәйҙулла Дәүләтшин (яҙыусылар), Башҡорт академия драма театрының художество етәксеһе Мәкәрим Мәһәҙиев, ошо уҡ театрҙың артисы Вәлиулла Мортазин, Яҙыусылар берлеге рәйесе Дауыт Юлтый - барыһы 44 кеше. Ғәзиз Әлмөхәмәтов был исемлектә Дәүләт концерт берекмәһе артисы булараҡ теркәлгән була. 1938 йылдың 10 июлендә башҡорт мәҙәниәте, фәне, шулай уҡ халыҡ хужалығы элитаһы юҡҡа сығарыла.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**



*"Беренсе Республика" фильмынан кадр.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Манатов В. И. Ленин менән шул мәсьәлә буйынса 1918 йылдың 7 ғинуарында һөйләшкән. Һөйләшкән саҡта В. И. Ленин: "Беҙ башҡорт хәрәкәтен беҙгә ҡаршы йүнәлтелгән контрреволюцион хәрәкәткә һанамайбыҙ... Беҙ көнсығыш халыҡтарының милли хәрәкәтен бик тәбиғи һәм кәрәк тип һанайбыҙ. Көнсығыш халыҡтары социаль революцияға милли революция аша ғына килә ала", - тигән. Шундай дөрөҫ һүҙҙәрен әйтһә лә, В. И. Ленин ҡәтғи ҡуйылған мәсьәлә тураһында һөйләшеүҙән ялтанған һәм шунда уҡ үҙенең власы һәм абруйы менән баҫым яһап, Манатовты башҡорт эштәре менән туранан-тура шөғөлләнеүҙән ситләштергән. Шулай итеп, Манатовтың, "талап ителгән автономияны хуплаған хәлдә башҡорт хәрәкәте Советтарға ҡаршы йүнәлтелмәҫ, ә Дутовҡа ҡаршы көрәштә бик ҙур көс булыр", тип асыҡ әйтеүенә ҡарамаҫтан, Рәсәйҙең ул дәүерҙә берҙән-бер үҙәк хөкүмәте булып торған Совет хөкүмәте башҡорт автономияһын раҫлауҙан баш тартҡан. Уның был эше милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы хаҡындағы большевиктар декларацияһының ҡоро һүҙ икәнен асҡан һәм алдағы фажиғәләргә төп сәбәпсе булған.

Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙа ойошоп, шунда урынлашҡан, ә ул ҡала 1917 йылдың 25 октябренән казак атаманы Дутов ҡулында булған. Башҡорт хөкүмәте үҙ-ара дошманлашҡан рус көстәренең ҡайһы яғы ҡаланы биләп тороуына әһәмиәт бирмәгән, кем биләһә лә, битарафлыҡ һаҡлап, ул үҙ урынында, үҙ ерендә ҡалған. Үҙенең битарафлығы хаҡында Башҡорт Мәркәз шураһы бер нисә тапҡыр белдереү яһаған. Шуның өсөн 1918 йылдың 18 ғинуарында Ырымбурҙы Ҡыҙыл гвардия частары алғас та, Башҡорт хөкүмәте ҡаланан китмәгән, ә үҙ эшен дауам иткән. Ул Совет власына яҡшы мөнәсәбәт белдергән һәм унан да шуны көткән. Ләкин ғәмәлдә улай булып сыҡмаған. Ҡыҙыл гвардияның командованиеһы башҡорт милли хәрәкәтен Советтарға ҡаршы тип, ә Башҡорт хөкүмәтен мулла һәм ҡулактарҙан ғына торған контрреволюцион хөкүмәт тип һанаған. Татарҙар быны белеп, шунда уҡ башҡорт автономияһын бөтөрөү өсөн унайлы хәлдән файҙаланмаҡ булған. Улар ҡыҙыл командованиеға башҡорттарҙы Дутов яҡлы тип яманлаған, шулай итеп ҡыҙылдарҙы башҡортҡа тамам дошман иткән. Башҡорттарҙы һәм Башҡорт хөкүмәтен ҡаты эҙәрлекләй башлағандар. Шундай шартта, 1918 йылдың 3 февралендә татар шовинистарының ояһы булған Мосолман хәрби-революцион комитеты Башҡорт Мәркәз шураһы менән Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡулға алырға ҡарар сығарған. Әммә ләкин башҡорттарҙың контрреволюцияла ҡатнашыуын, Дутов менән бәйләнештә булыуын күрһәткән һис бер документаль дәлил булмаған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттарҙы дошман күргән рус большевиктарына татарҙар теләге етерлек нигеҙ булған: 1918 йылдың 4 февралендә Ырымбур губерна хәрби революцион комитеты Мосолман хәрби ревкомының ҡарарын хуплап, Башҡорт Мәркәз шураһы менән Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәгә япҡан һәм уларҙың кассаһынан башҡорт халҡының хөкүмәт ихтыяжына йыйып биргән 217 мең һум аҡсаһын алған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Хеҙмәттәрҙә хаталар ҙа күп. Мәҫәлән, ҡайһы бер хеҙмәттәрҙәге кейемдең түбәнге донъяны һүрәтләгән ерҙәрен уҡығанда, миндә шик уяна. Борон түбәнге донъяны кейемдә һүрәтләмәҫтәр, киреһенсә, унан һаҡланырға тырышырҙар ине.*

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘ

## КӨМӨШ ТӘҢКӘ ЗЫҢЫН

**Халыҡтың борондан формалашҡан йәшәү рәүешен, шөғөлөн, йолаларын, шулай уҡ уның ниндәй тарихи ваҡиғалар эсендә ҡайнап йәшәүен асыҡ күрһәтә торған бер күренеш бар. Ул - традицион милли кейем. Ғилеме булған кеше унан халыҡтың донъяға ҡарашы, йәмғиәттең социаль, матди, хатта техник үҫеше кимәле тураһында әллә күпме мәғлүмәт ала ала. Һуңғы йылдарҙа милли кейемдәргә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәүестәренә иғтибар артты. Әммә хәҙерге заман костюмы, биҙәүестәре - дизайн продукты. Кейем-биҙәүестәрҙең тарихи ерлеген, биҙәктәрҙең мәғәнәһен өйрәнеп ултырыусылар һирәк. Бының кире яғы бармы? Милли кейем тегеү йә биҙәүес яһау алдынан нимәләргә иғтибар итергә? Ошолар тураһында Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Сибай сәнғәт колледжы ҡарамағындағы Сәсәндәр мәктәбе етәксеһе Асия ҒӘЙНУЛЛИНА, филолог, тыуған яҡты өйрәнеүсе белгес Азат ҒАРИПОВ, башҡорт кейемдәрен реконструкциялау оҫтаһы Илдар ҒАТАУЛЛИН менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**Бөгөн башҡорт традицион костюмы, биҙәүестәре өлкәһендә һеҙҙән дә күберәк эшләгән, һеҙҙән дә күберәк белгән кешеләр юҡтыр, моғайын. Милли кейемдәребеҙҙе тергеҙеү эшенә тотонорға нимә этәргес булды?**

**А. Ғарипов:** Мин бөгөнгө әңгәмәселәремдең эшен гел күҙәтеп барам, уларҙың фиҙаҡәр тырышлығына һоҡланам, улар ысынлап та был өлкәнең ветерандары. Үҙемде иһә теоретик тип әйтә алам. Тел белгесе булараҡ, һүҙҙәрҙең килеп сығыу тарихы ҡыҙыҡ миңә. Учалыла тыуғанмын, ошо ерлектә йәшәйем һәм башҡорт биҙәнеү әйберҙәре араһында башҡа яҡтарҙа "һаҡал", "селтәр" тип йөрөтөлгән биҙәнеү әйберен учалыларҙың "яға" тип йөрөтөүе миндә ҡыҙыҡһыныу уятты. Һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныу йәйләп предметҡа ла күсә. Мин йәйләп районыбыҙ ауылдары буйлап экспедиция башланым. Маҡсатым - боронғо яғаларҙы табыу ине, быға кәмендә 3 йыл ваҡыт китте.

**А. Ғәйнуллина:** Элек ниндәйҙер конкурстамы, башҡа берәй сараламы сығыш яһарға булһа, милли кейемдәрҙе клубтарҙан, мәҙәниәт һарайҙарынан ала инек бит инде. Мин дә урындағы музейҙан селтәр һорап тора инем. Бер юлы һүтелеп торған урындарын рәтләп тегеп бирәм. Икенсе юлы селтәрҙең икенсеһен бирәләр, уның да һүтелгән ерҙәрен матурлап алып киләм. Бер барғанымда музейҙың йүнәттерә торған селтәрҙәре бөткән дә, экспонаттарҙы бирергә ярамай, тинеләр ҙә ҡуйҙылар. Шунан селтәрҙе үҙем эшләп алырға дәртләндем. Ҡартәсәйем мәрхүмә менән эшләй торғайныҡ ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәрен. Тәҙрәләге пәрҙәләрҙе тартабыҙ, ишекте әләбеҙ ҙә, урындыҡҡа ултырып, ҡартәсәйем селтәргә мәрйенде теҙә. Мин урамдағы тауыштарға ҡолаҡ һалып, әнәгә еп һаплап биреп ултырам. Килеп, селтәрҙәрҙе алып китмәһендәр, тигән ҡурҡыу ҡалғайны бит өләсәйҙәребеҙ быуынында. Әйткәндәй, ҡартәсәйемдең аслыҡ ваҡыттарында ла һаҡлап ҡалған селтәрен Өфөнән бер ғалим, күрһәтәм, тип кенә алып китте лә, кире ҡайтарманы. Шул селтәрҙе хәтеремә төшөрөп, шуға оҡшатып эшләп алдым үҙемдең селтәрҙе. Ошонан һуң мауығып киттем был һөнәр менән...

**И. Ғатауллин:** Минең башҡорт милли кейеменә килгән юлым бик оҙон. Башта Урта быуаттар кейемен реконструкциялаған оҫталар менән аралаштым. Унан һуң "Төньяҡ амурҙары" клубы менән таныштым. Уның етәксеһе Илдар Шәйәхмәтов башҡорт көнитмешенә ҡағылышлы бөтөн нәмәне йыйғайны: хром итектәр, эйәр, кейеҙ, яугир кейеме һ.б. Ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы мине был донъя, үҙемә костюм тегеп алдым. Бородиноға барып ҡайттыҡ. 2010 йылда, башҡорт ирҙәр костюмы тураһында барыһын да беләм, тигән фекергә килдем. Ул төркі телле халыҡтар өсөн уртаҡ, бер тамырҙан. Бары тик ирҙәр костюмындағы биҙәктәрҙең мәғәнәһен, үҙенсәлектәрен генә аңламай инем ул ваҡытта. Өфө дәүләт сәнғәт институтында дизайнерға уҡып йөрөй инем, диплом эшемдән тыш, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүесен дә тәҡдим иттем. Антиквариат магазиндарында яткан биҙәүестәрҙе һатып алып, ысын көмөш тәңкәләр менән яға эшләнем. Ғөмүмән, мин бер кем дә эшләмәгән эшкә тотонорға яратам. Милләттәр араһындағы үҙенсәлектәрҙе юйырға ынтылған совет заманында күп нәмә ысынлап та юҡҡа сыҡҡан. Хатта костюм тегеүсе оҫталар ҙа һәр халыҡтың мәҙәниәтендә булған үҙенсәлектәрҙе онотоп, барыһын да ябайлаштырған. Мәҫәлән, ирҙәр күлдәге башҡа милләттәрҙекенә оҡшап бөткән. Бөгөнгө милли кейем тегеү оҫталары ла эҙләнмәй, өйрәнмәй, ошо ябайлаштырылырға тырышыу ҡалыбынан ҡотола алмай. Мин иһә сәхнә кейеме, бутафориянан китеп, ысын традицион кейем йүнәлешендә эшләйем.

**Хәҙерге көндә башҡорт традицион милли кейеме, биҙәүестәр, тәү сиратта, дизайн продукты. Уларҙың матурлығынан бигерәк, фәлсәфәүи мәғәнәһе ҡиммәтерәк, әммә быны үҙен оҫта тип иҫәпләүселәргә нисек аңлатырға?**

**И. Ғатауллин:** Милли кейем һәм биҙәүес бетеү, ауырыуҙан, сир-зәхмәттән һ.б. һаҡлаусы функцияһын үтәгән. Әммә кейем бетеү генә түгел, ул китап та булған. Кейем буйынса башҡорттар йәшәгән донъяны һүрәтләп бирергә мөмкин. Биҙәктәр башҡорттоң ҡайһы ерҙә йәшәүен, нимә менән шөгөлләнеүен күрһәткән. Ниндәй юлдар буйлап йөрөүе лә сағылыш тапҡан кейемдә, йылға буйлап хәрәкәт итһәләр, кейемдәре был турала "һөйләп" торған. Баймы ул, фәҡирме, сауҙагәрме, яугирмы - кешенең йәмғиәттәге социаль хәле лә шунда уҡ күренгән. Балаларға донъя тураһында һөйләгәндә, уны кейемгә күрһәтеп аңлатҡандар. Тирмәләге бөтөн көнкүреш донъяны аңлатҡан. Һәм балалар ошо мөхит эсендә үҫкән. Хәҙерге көндә милли кейемдең мәғәнәһен тулыһынса тиерлек юғалтҡанбыҙ. Унда бер генә тәңкә лә юҡҡа ғына тегеп ҡуйылмаған. Барыһы ла йә йоп, йә таҡ һанда булған. Һәр һан нимәнелер белдергән. Заманса тел менән әйткәндә, кейем кешенең паспорты булған.

**А. Ғәйнуллина:** Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәренә килгәндә, һәр биҙәктә халыҡтың донъяға фәлсәфәүи ҡарашы ята. Ҡартәсәйем үҙе эшләп ултыра, үҙе һөйләй: "Көн нуры эшләйбеҙ, көн нуры..." - ти. Баламын әле, көндөң нурһыҙ ла буламы икән, тип уйлайым эстән генә. Өҫкә лә, аҫҡа ла ҡарап торған ярымтүңәрәк биҙәктәрҙе шулай атай ине ҡәртәсәй. "Көн нуры осона орлоҡ ҡуйбыҙ", - ти. Шул зиһенгә һалынғайны. Бынан бер нисә йыл элек Фәндәр академияһы һүҙлек сығарғайны, ҡараһам, көн нуры - ҡатын-ҡыҙ нуры, ай нуры - ир нуры, тип яҙылған. Ҡояш нурынан тыш, ерҙәге орлоҡ та шытым бирмәй. Ир-егет нуры, ҡәртәсәйем әйтмешләй, орлоҡ. Ай нуры һүҙылып төшөп, йәшәүгә, тереклеккә башланғыс бирә. Быны ошонда ғына ла күпме мәғәнә һалынған һәм беҙҙең ҡартәсәйҙәр ошондай кимәлдә аңлы һәм ғилемле булған. Ҡул эшенең энергияһы ла башҡа. Мин селтәр йә һаҡал эшләйем дә, ҙур эш эшләгәндәй, уға һоҡланып, яратып, һыйпап ултырам. Студенттарым да хәҙер шуға өйрәнеп бөткән. Матур килеп сыҡты бит, тип һыйпап ултыралар. Һыйпаһаң, һоҡланһаң, ыңғай энергия әйбергә лә күсә.

**А. Ғарипов:** Ауылдар буйлар яғаларҙы өйрәнеп йөрөгәндә иң үкендергәне шул булды: кемдәрҙер үҙендә боронғо бай яғаны һаҡлап та, уның тәғәйенләнешен, функцияһын белмәй. Йәғни, әйбер бар, ә ошо кәрәкле мәғлүмәт һаҡланмаған. Кемдәрҙер уны үҙенсә яңыртырға маташып, туҡымаһын алыштыра, кемдер реконструкцияға биреп һүттергән һәм бөтөнләй икенсе яға килеп сыҡҡан. Тәңкәләре боронғо ла, урыны алышынған. Ҡарайған көмөш тәңкәләрҙе, тәбиғи мәрйендәрҙе химик матдәләр менән йыуып, яндырып, ағартып бөткәндәр бар. Шул рәүешле уның боронғолоғо, тарихи ысынбарлығы юғала. Бына ошолар ҙа яғаларҙы өйрәнеү эшен ҡатмарлаштыра.

**И. Ғатауллин:** Ғөмүмән, борон кейем мода өсөн тегелмәгән. Ул йәшәйеш шарттарына яраҡлаштырып булдырылған. Илдар Шәйәхмәтов менән Бородиноға, хәрби-тарихи фестивалгә барҙыҡ, тигәйнем бит, шунда мин теккән еләнемдең ябынып ятыу өсөн ҡулайлы булырға, өшөмәҫ өсөн ҡулдарҙы, муйынды ҡаплап торорға тейешлеген яҡшы аңланым. Баш кейеменең дә 3-4 дүрт тәғәйенләнеше бар. Һыуыҡ миҙгелдә, ялан шарттарында ошоларҙың барыһын да үҙем аша үткәрергә тура килде. Әгәр ҙә һин теккән костюмыңды ҡалала башлыса берәй конференцияға, байрамға кейәһең икән, әлбиттә, уның тәғәйенләнеше лә үҙгәрә. Бөгөн йәштәр генә түгел, зыялылар ҙа боронғо дөрөҫ костюм менән яһалма тыуҙырылған костюм араһында айырма күрмәй. Ошо ғилемһеҙлек менән дә көрәшәм. Фотосессияларҙа стилләштерелгән костюм кейәләр һәм шулай матур икән тип уйлайҙар. Бер тапҡыр телевидение журналисы миндәге ысын башҡорт милли кейеме өлгөһөн, был ҡайһы милләт кейеме, тип һораны. Белемһеҙлеккә ҡаршы көрәшергә кәрәк әле беҙгә...

**Кейем һәм биҙәүестәрҙе өйрәнә башлағанда тәү сығанаҡ тип нимәне иҫәпләйһегеҙ?**

**И. Ғатауллин:** Тәүге ирҙәр костюмын Руденконың "Башкиры" тигән китабы буйынса тектем. Әгәр ҙә кемдер костюм тегеү менән шөғөлләнә икән, тәүҙә мәғлүмәтте китаптарҙан алһын. Тик китаптарҙы ла табыуы ауыр бөгөн. Магазиндарҙа 5 меңгә лә милли кейем тураһында китап табып булмай, хаҡына ҡарамай һатып алыр инек. Ауылдарҙа Шитованың, Камалиевтың китаптары ла китапханала ғына, ҡулдан-ҡулға йөрөтөргә мәжбүрҙәр. Нинә ул китаптар ҡабаттан сығарылмай, нисек ошо көнгә төштөк, тип аптырайым, милли кейем һәм биҙәүестәр буйынса бар ғилемде юғалтабыҙ бит.

Кейемдәрҙе музейҙарҙағы өлгөләрҙән дә өйрәнергә була. Әммә музейҙарҙа, мәҫәлән, күсереп алып ҡына тегерлек ирҙәр кейеме юҡ. Унда башлыса совет осорондағы театр реквизиттары һаҡлана. Китаптарҙа һүрәтләнмәгән мәғлүмәт, уйланып йөрөй торғас, үҙе килә. Шуны ла әйтергә кәрәк: хеҙмәттәрҙә хаталар ҙа күп. Мәҫәлән, ҡайһы бер хеҙмәттәрҙәге кейемдең түбәнге донъяны һүрәтләгән ерҙәрен уҡығанда, миндә шик уяна. Борон түбәнге донъяны кейемдә һүрәтләмәҫтәр, киреһенсә, унан һаҡланырға тырышырҙар ине. Кейем дә, ундағы бөтөн биҙәк тә тап шул яуыз көстәрҙән һаҡлаусы булған. Шулай ҙа хәҙер, әйтә торғас, ҡашмауҙы дөрөҫ кейә башланылар. Сәстәр ябыҡ, йөҙ асыҡ, муйынды ҡаплаусы һаҡал, һағылдырыҡ бар. Селтәр-һаҡалдар элек аҫта һәленеп тора ине, уны өҫкәрәк тартып таға башланылар. Йәғни, ҡатын-ҡыҙ башланғысын һаҡлаусы әйберҙәрҙе дөрөҫ кейә башланылар.

**А. Ғәйнуллина:** Селтәр, һаҡал, алмиҙеү, яға кеүек биҙәүестәрҙең һәр береһе буйынса докторлыҡ хеҙмәттәре яҙырға була, әлбиттә. Ромб, кәрәҙ һ.б. биҙәктәрҙең төрөн билдәләп, уларҙы яһау буйынса ла эшләргә кәрәк, егеттәр.

**А. Ғарипов:** Учалыла ла яғаны тергеҙеүгә әүҙем тотондолар. Телевидение, район бәйгеһе үткәрәйек, тигән тәҡдим менән сыҡҡас, ағинәйҙәрҙе йыйҙыҡ та, һәр бер ауылда ниндәй яғалар булғанын күрһәтеп, мәғлүмәт бирҙек. Ә махсус китаптар юҡ, дөрөҫ әйтәһегеҙ. Булғандарында ла әйберҙең тасуирламаһы бар, ә мәғәнәһе, фәлсәфәһе яҙылмаған.

Фән кешеһе булараҡ, берәй 50 йылдан әле булған өлгөләрҙең дә тарих туҙанына әүерелерен яҡшы аңлайым. Шуға ла район биҙәүестәренең альбом-каталогын төҙөргә тигән маҡсат ҡуйып, шәхси коллекцияларҙы эҙләй башланым. Бөгөнгө хәлендә уларҙың үҙенсәлектәрен, үлсәмдәрен яҙып, теркәп ҡуйырға кәрәк. Тыуған яҡты өйрәнеү музейында 20-нән ашыу өлгө бар. Шәхси ҡулдарҙа иһә өй шарттарында һуғып яһалған ерлеккә баҫылған яғалар осраны. Уртаса йәше 100 йыл тирәһе булған 45-ләгән яға барлығын асыҡланым. Халыҡта ҡурҡыу ҡалған, тип әйтте Асия апай, күптәр һаман да ошо ҡомартҡы-

✓ ***Боронғо бейеүҙәрҙәге бөтөн хәрәкәттәр костюм тауышланһын өсөн башҡарылған. Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар бейеүендә бейеүселәрҙең баштарын һелкетеүе ҡыҙыҡ тойола, ысынында иһә, улар ошо рәүешле тауыш сығарған.***

# БЕЙЕГӘНДӘ...

## ишетергә теләр инек



ларҙы күрһәтергә ҡурҡа. Репрессиялар мәлендә ағас төбөнә күмеп, аҙаҡтан тапмағандар ҙа бар. Кемдәр сигандарға тотторол ебәргән, кемдәр һыуытҡыска, телевизорға алышҡан. Аңлылары алып ҡалған, әммә уларҙың яғаларын урамда үткән байрамдарҙа күреп булмай, улар һандыҡ төбөндә һаҡлана һәм ул яғаның барлығын күршеһе лә, нәҫел-заты ла белмәй.

**И. Ғатауллин:** Мин милли кейем, биҙәүес тураһындағы китап ниндәй булырға тейешлеге тураһында күп уйланым. Ниндәйҙер дөйөм йыйылма булһын тиһәк, беҙгә интернетта ҙур музей булдырырға кәрәк. "Мин шул райондан, шул ырыуҙан, минең костюмым ниндәй булырға тейеш?" - тип йыш һорайҙар минән. "Фотоларын күрһәтегеҙ, әйҙәгеҙ, бергәләп ҡарайыҡ", - тип яуаплайым уларға. Бергәләп эшләй алыр инек, моғайын, был эште. Матур бер миҫал килтерер инем. Ижевскиҙа халыҡ кәсептәре үҙәге бар, унда үҙ эшен белгән шәп осталар эшләй. Уларҙың сайты бар, унда ҡайны оҫтаның ниндәй тауары бар - барыһы ла күренеп тора. Интернет аша заказ биреп, эшләтеп алырға ла була. Дөрөҫөн әйткәндә, был үҙәкләштерелгән ҙур магазин. Теләһәләр, улар башҡорт милли кейемдәрен дә тегә алыр ине.

Ни өсөн костюм теккәндә белгескә мөрәжәғәт итергә? Борон бөтөн эштәр ырыу эсендә бүленгән булған, мәҫәлән, кемдер кейеҙ, кемдер балаҫ һуҡҡан, кемдер ҡорот ҡайнатҡан, кемдер ҡымыҙ бешкән. Ә кемдер биҙәүестәр яһаған һәм кейем теккән. "Яға" тибындағы биҙәнеү әйберҙәрен алып ҡараһаң, төрлө яҡтан килгән яғалар силуэты буйынса бер-береһен ҡабатлай. Сөнки аныҡ ҡанундар булған, әгәр ҙә һеҙҙең районда яғаны тап ошолай итеп яһаһалар һәм һеҙҙең яғағыҙ уға оҡшамай, айырылып тора икән, иманым камил, башҡалар күҙегеҙҙе лә астырмаясаҡтар һәм һеҙ уны таға алмаясаҡһығыҙ. Һуңғы совет осоро яғаларында был ҡанундарҙы күҙәтеүсе булмаған. Музейҙарҙа ла ошо һуңғы осор биҙәүестәре һаҡлана, уларҙың күбеһенең ерлеге зингер машинаһы менән тегелгән һәм уларҙа тайпылыштар күп. Минеңсә, бөтөн биҙәүестәрҙең дә нигеҙе бер, иң боронғоһо, моғайын, инйәр һаҡалылар. Унан һаҡалдың бер төрө - Ағиҙел арьяғы һаҡалы, унан инде селтәр килеп сыҡҡан. Яға - формаһын үҙгәрткән Ағиҙел арьяғы һаҡалы. Әммә бында ла һорауҙар күп, ни өсөн Ағиҙел арьяғы һаҡалы тип аталһа ла, Өфө яғы һаҡалдарына оҡшамаған?

▸ **Бөгөн беҙҙең тағы ла ниндәй биҙәүестәребеҙ, кейемдәребеҙ тергеҙеүҙе көтә?**

**И. Ғатауллин:** Мин көмөш тәңкәләр зыңлауын ишетергә теләйем. Милли костюмдың үҙгәреүен Ф. Гәскәров ансамбле миҫалында ҡараһаҡ, бейеүҙә көслө музыка ҡулланылмаған, ҡурай, ҡумыҙ тауышы ишетелер-ишелмәҫ кенә булған. Боронғо бейеүҙәрҙәге бөтөн хәрәкәттәр костюм тауышланһын өсөн башҡарылған. Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар бейеүендә бейеүселәрҙең баштарын һелкетеүе ҡыҙыҡ тойола, ысынында иһә, улар ошо рәүешле тауыш сығарған. Көмөш зыңы юғалды, ә совет, рәсәй тәңкәләре, ҡытай фольгаһының тауышы юҡ. Көмөш сыңы бик моңло, балалар илаһа, биҙәүестәрҙе уларға биргәндәр ҙә ҡуйғандар. Боронғо кейемдәрҙә көмөш тәңкәләр менән тергеҙергә, көйгә ҡушылып сыңлауын ишетергә теләр инем.

**А. Ғәйнуллина:** Минең дә бар ундай хыялым. Үҙәк каналдарҙың береһендә бер тапшырыуҙа: "Почему башкирскую женщину сначала слышно, потом видно?", - тип һорау бирәләр бер көндө. Мин дә шул көмөш тәңкәләр зыңлауын ишетергә теләр инем. Гәләбәш буйынса һорауҙар күп, уның нисек эшләнгәнен аңларға маташып, Санкт-Петербургтағы музейға бер нисә көн рәттән йөрөнөм. Тотоп ҡарарға рөхсәт итмәнеләр. Икенсе гәләбәш өлгөһө Будапешта, унда барып ҡарарға кәрәк. Унан һуң, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында яурынса (пелерина) бар, тип яҙа Шитова, "Мода энциклопедияһы"нда ул, византия яғаһы, тип килтерелгән. Месопотамия ят ер булмаған, "Урал батыр" эпосын "Гилгәмеш" менән сағыштырабыҙ икән, уртаҡлыҡтар булыуы ихтимал. Бына шул яурынсаны тергеҙергә ине.

Биҙәүес төрө булған мәрүәт мине нык ҡыҙыҡһындыра. Сибай ағинәйе Фәниә Сарбулатова өләсәһенең һары мәрүәт тураһында һөйләгәнен хәтерләп ҡалған. Ә минең хәтеремдә ул аҡ булып ҡалған, ҡәртәсәйемдең мәрүәтте һыйпап ебәреүен, уның матурланып китеүен иҫләйем. Аҡ мәрүәт ҡытайҙарҙа юғары баһаланған, тиҙәр. Бәлки, беҙҙә ниндәйен таба алғандар, шуны ҡулланғандарҙыр. Мәрүәтте өҫтөнән йәки уртаһынан тишеп ҡуялар. Һаҡмарҙан, Төйәләҫтән эҙләп ҡараным, йылға ҡабырсаҡтары юҡ хәҙер, булһа, өләшләп бысып булһа ла баҫыр инек. Балаларҙың кейемдәренә мотлаҡ мәрүәт ҡуйырға кәрәк. Ҡаҙҙың өлпәтәкәйен ҡулланмайҙар бөгөн, элек кейемдең биленә, яурынға тегәләр ине. 2008 йылда Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Шәүрәкәй"ҙе ҡуйғанда ҡыҙҙарға маңлайса тегеп, уларҙы ла өлпәтәкәй менән биҙәнек. Маңлайсаға ҡәнәфер орлоғон епкә теҙеп, сикәлек яһаныҡ. Араларына мәрйен дә ҡуйып ебәрһәң, бигерәк матур була. Бармаҡты саҡ ҡына еүешләп, ышҡып ебәрһәң, еҫе сығып тора. Халыҡ йыры юҡтан бар булмағандыр бит. Балаларҙың, ҡыҙҙарҙың биҙәүесендә, әбейҙәрҙекендә ҡәнәфер орлоғо мотлаҡ булырға тейеш.

**И. Ғатауллин:** Шуныһы ҡыҙыҡ, Башҡортостан сыуаштарының баш кейемдәре башҡа яҡтарҙа йәшәүсе сыуаштарҙан айырылып тора. Беҙҙән сыуаштарҙа хушпу һаҡланған, башҡорттоң бындай баш кейеме юҡҡа сыҡҡан. Гәләбәшкә килгәндә, сыуаштарҙа уға оҡшаған баш кейеме бар, беҙҙә тағы ла юҡ булған.

Беләһегеҙме, башҡорттарҙың биҙәүестәрҙе тәңкәләр менән биҙәргә яратыуын аңлап ҡабул итеп, Мәскәүҙәге, Петербургтағы фабрикаларҙа махсус рәүештә биҙәүестәр, жетондар ҡойғандар. Был, тишеп, аҡсаны боҙмаһындар өсөн эшләнгән. Башҡорттар араһында билдәле булған төрөк, һинд тәңкәләренең күсермәләре яһалған. Жетондарға килгәндә, биҙәүестәрҙән күренеүенсә, улар араһында дин үтеп ингәнгә тиклемге осорҙа ҡулланылған орнаменттар күп ҡулланылған. Дин уларҙы тыймаған, сөнки улар үҫемлек орнаменттары. Башҡорт яугирҙарының ҡоралдарында, кейемендә, баш кейемендә улар йыш ҡулланылған. Бөгөнгө көнгә был биҙәктәрҙең семантикаһына төшөнгәнмен. Улар тәңрелек менән бәйле, башлыса 3, 4, 8 тажлы сәскәләр. Улар боронғо һәм һаҡлау ролен үтәгән билдәләр. Бохара, Төркиә, Шамил ордендарында ла, Кавказда ла бар бындай орнаменттар. Был үҙе айырым тема һәм уның тураһында оҙаҡ итеп һөйләргә була.

**А. Ғарипов:** Гәләбәш-кәләбәш тигәнгә телсе буларак ҡына бер өҫтәмә әйтеп китергә теләйем. "Гәлә" + "баш" тигән ҡушма һүҙ, диалекттарҙа фонетик үҙгәрештәр булыуын иҫәпкә алып, ул йә "гәлә", йә "кәлә" формаһында. "Баш" тигән һүҙ аңлашыла, үҙенең тура мәғәнәһендә ҡулланыла. "Гәлә" тигәндә ауыл кешеһе шунда уҡ ҡаҙҙың күҙ алдына килтерә. Инә ҡаҙҙың башында өлткәйе була, "гәлә" тигән һүҙ ошо өлткәйҙе белдерә лә инде. Бының баш кейеме менән бәйле булыуы ла, булмауы ла бар, әммә ҡыҙыҡлы сағыштырыу килеп сыға. Күп һүҙҙәр бит йәшәйеш менән бәйле, баш кейеменең атамаһын да йыраҡтан эҙләмәгәндәрҙер, тип фаразларға була.

**И. Ғатауллин:** Ҡашмау - ҡыҙҙарҙың баш кейеме, тип мин күптән әйткәйнем. Бына бит, ҡашмау - ул ирекле ҡош, ә гәләбәш йорт ҡошо, уны инде бер ҡайҙа ла осоп китә алмаған кейәүгә ҡатындар кейгән.

**А. Ғарипов:** Экспедицияларҙа ҡортбаш менән бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәт осраны. Был да тәңреселек осорона бәйле. Этнографик һүрәттәрҙә лә күрәбеҙ, элек мал аҙбары тирәһенә йылҡы малының баш һөлдәһен ҡаҙап ҡуйғандар. Ул әлеге лә баяғы һаҡлаусы ролен үтәй. Йылҡы малының баш һөлдәһен үҙең менән йөрөтөп булмай бит инде, шуға ла ҡортбашты уға оҡшатып, уны баш һөлдәһенең бәләкәй варианты итеп күреп, кейемдәренә теккәндәр. Бына шундайыраҡ фәлсәфәүи ҡараштар осрап ҡуя.

Мәрүәткә килгәндә, халыҡ икенсе төрлө уны "син" тип йөрөткән. Ул "Ҡытай" тигәнде белдерә. Шуға ла ҡытай мәрүәте киң билдәле булғанына аптырарға ярамай. Уны кейемгә тағып ҡына йөрөмәгәндәр, тире ауырыуҙарында бысаҡ менән ҡырып, тирегә һылағандар. Көмөштө лә, аҡыкты ла тағып та йөрөгәндәр, ҡырып, дарыу итеп тә ҡулланғандар. Түшелдеректәрҙе дөйөм алып ҡарағанда, донъя кимәлендә уның һәр элементын төрлө милләттәр ҡулланған. Ә башҡорттар шуларҙы бергә йыйып, һөҙөмтәлә көслө һаҡлаусы әйбер килтереп сығарған. Унда артыҡ бер нәмә лә юҡ, һәр бер элементы уйланған. Элек тә ялтыр-йолтор әйберҙәр күп булған, сөнки ниндәй генә сауҙа юлы үтмәгән беҙҙән. Юғары зауыҡлы, матурлыҡты аңлаған һәм ҡәҙерләй белгән милләт буларак, башҡорттар уларҙың иң-иңдәрен генә һайлап алған һәм ҡулланған. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ҡайһы бер халыҡтар үҙҙәрендә бындай матурлыҡты булдырырға теләй, әммә уларҙа юҡ. Ә беҙҙә тулып ята, ҡәҙерен генә белмәйбеҙ, һаман тәртипкә һала алмайбыҙ.

**А. Ғәйнулина:** Эйе, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәренең матурлығын күрҙеләр һуңғы ваҡытта, уны ҡулланырға тырышалар. Әммә... Боҙоуҙар китте. Хакастарҙың түшелдерегe күкрәктең өҫтөндә генә ята ла, унда 3 ҙур төймә тора. Хәҙер беҙҙекеләр ҙә хакас булып бөтөп бара, 3 төймәме, 3 биҙәүесме ҡуйып, 3 түңәрәк яһайҙар ҙа, муйындарына ҡыҙыл сепрәк аҫып ҡуялар. Мәғәнәһен өйрәнмәйенсә, биҙәнеү әйбере яһайһығыҙ икән, ул ҡытайҙың тауарынан бер ере менән дә айырылмаясаҡ. Биҙәүестәр, кейем һеҙҙе һаҡлаһын тиһәгеҙ, ғилемгә таянығыҙ, тип әйтке килә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Төрлө йүнәлештә, әммә бер маҡсатта эшмәкәрлек алып барған ҡунаҡтарыбыҙ менән һөйләшеү күптәргә фәһемле булғандыр, тип ышанабыҙ. Ғөмүмән, башҡорт кейеме һәм биҙәүестәре өлкәһендә һөйләшеүҙәр алда ла булыр әле. Сөнки был юҫыҡта асыҡлайһы әйберҙәр етерлек. Интернетта дөйөм бер сайт булдырып, унда һәр ырыуҙың кейеме һәм биҙәнеү әйберҙәрен ҡуйырға кәрәк, тигән фекер буйынса ла һәр кемдең тәҡдимдәре булыр, моғайын. Һеҙҙе лә был һөйләшеүгә ҡушылырға саҡырабыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

**✓ Илдә кемдәрҙер ғүмер буйы халыҡ иҫәбенә байлыҡ туплай. Улар бер ағас түгел, миллионлаған, хатта миллиардлаған һум аҡса урлай, ә һыуҙан ҡоп-ҡоро сыға, бер ниндәй штраф та түләмәй, яза ла күрмәй.**






Тышҡа сыҡҡайны, көй туҡтаны. Ҡапыл туҡтаны. Сиңерткәләр сырлағаны ишетелде. Ҡоштар ҙа һайрай, ана. Кәкүк тә саҡыра. Шамилға рәхәт булып китте. Донъя ҡалай күркәм! Уның ҡапыл ашағыһы килде. Асыҡтырған икән. Яңынан өйгә инде.

- Әсәй, һинең ҡулыңдан яһалған сәйҙе һағындым, - өҫтәл артына ултырҙы. - Асыҡтырған да.

- Хәҙер, хәҙер, улым. Утыҙға етеп киләһең, һаман сабыйһың инде.

- *Ты жива еще, моя старушка?*
*Жив и я. Привет тебе, привет!*
*Пусть струится над твоей избушкой*
*Тот вечерний несказанный свет.*
*Пишут мне, что ты, тая тревогу,*
*Загрустила шибко обо мне...* - тине лә ҡабаланып, әсәһен ҡосаҡлап алды.

- Ҡуй әле, былай ҙа кисәнән бирле эсем боша.

- Нимәгә?

- Кем белә инде, изгегә булһын, тим.

Ултырып сәй эсеп алдылар. Тамаҡҡа ла аш үткәндәй. Әсәй ҡулынан һәр ризыҡ татлыға әйләнә шул. Шамилдың ҡапыл тағы ҡолағына ниҙер ишетелгәндәй булды.

- Аттар кешнәйме ул әллә, әсәй?

- Юҡ, бер ҙә ул-был тауыш сыҡҡандай түгел, - әсә кеше шулай ҙа һағайып ҡуйҙы. Бая тып-тын бүлмәлә, музыка аҡырталар, тип әйткәндәй булғайны. Бер генә ҡашы ҡырылған. Әллә берәй төрлө сихыр-фәлән эләктерҙеме? Күңеле былай ҙа артыҡ наҙлы. Башҡалар тау-таш араһында, урман-ҡырҙа аунап буй еткергәндә, был бит шиғыр тәмләп кенә, ат ҡосаҡлап ҡына үҫте. Нескә күңелгә шауҡым тиҙ бәрелеүсән дәһә. Йөрәгем туланы шул, юҡҡа ғына булмағандыр. - Арыһаң, ятып тор, улым.

- Йоҡом килә ул, әсәй, тик ятһам әүен баҙарына барып етер атымды бүреләр ҡамап бер була. Ана, ана тағы ат кешнәй.

- Бер ниндәй ҙә ат кешнәмәй, - Нәзирә апай ярһып китте. - Бар, ят. Йоҡлап ҡара.

Шамил эске бүлмәгә инеп ятты.

- Ах шуны! Юҡҡа кешнәмәй, тип әйттем бит. Урамға бүреләр килгән, - Шамил асмалы тәҙрәнән генә һикереп төштө лә, һарайҙа эленеп торған сыбыртҡыны алып шартлатырға, "фьют, фьют" тип һыҙғырырға тотондо. - Ҡара Радуловты ашарға килгәндәр, китегеҙ бынан! - ныҡ итеп һелтәнеп, сыбыртҡыһы менән урам ҡапҡаһының бағанаһына һуҡты, шунан нимәнелер баҫтырып тағы ергә һуҡҡыланы. Нигеҙ буйында саңға күмелеп ятҡан ике тауыҡ беренсе шартлауҙан уҡ оса-һикерә оло дау күтәреп, был-тирәнән сығып ҡасты. Шау-шыуға йүгереп килеп сыҡҡан Нәзирә апай шаҡ ҡатты, ятраҡан улы буш урамда, сыбыртҡыһын бушҡа һелтәй-һелтәй, бушлыҡты ҡыуа ине. Ихатаны арманһыҙ булып бер нисә урағас, күтәрмәгә килеп ултырҙы.

- Ҡара әле, әй, Радуловты ашарға килгәндәр. Күрҙеңме, әсәй? Ҡыуҙым, вис кенә ҡыуҙым. Бүреләр инеме, әллә эттәрме?

Нимә тип әйтергә белмәне әсәй кеше.

- Белмәйем шул... Нишләргә икән? - улын ҡосаҡлап, уның янына ултырҙы. - Хамматтың сәмәйен эсеп былай ҡотороуыңмы, улым? Шайтандарың ҡоторта шулай, - үҙен ни тиклем тыныс тоторға тырышһа ла, күҙенән йәше туҡтамай аҡты Нәзирәнең. - Күҙеңде асып ҡара әле, Шамил. Күҙең бит иҫән, ҡашың ғына ҡырылған. Ихатабыҙ буш та һуң. Алашаң күптән яланда. Эй, Аллам. Ин әйҙә.

Шамил ҡалҡынып оҙаҡ ҡына буш ихатаға ҡарап торҙо, сыбыртҡыһын күтәрмә аҫтына ырғытты. "Ҡыуғас, хәҙер буш инде", -тине лә әсәһе артынан эйәрҙе.

Ярты сәғәттән әлеге хәл яңынан ҡабатланды. Шамил тағы ла тәҙрәнән һикереп сыҡты ла, күтәрмә аҫтынан сыбыртҡыһын эҙләп табып, тағы атын ҡотҡарырға тотондо. "Вәт, әй, аңламағас, аңламайҙар бит былар", - тип сыбыртҡыһын тағы һелтәне. - Мине ашағыҙ, мә. Радуловты бер кемгә лә бирмәйем, анаһыҙҙар!"

Нәзирә апай, көскә тынысландырып, улын тағы өйгә алып инде лә, бындағы "Тиҙ ярҙам"саҡыртырға күршеһен ебәрҙе: "Шамил ауырый, тиҙ генә килеп етһен". Медтуташ хәлде шунда уҡ аңланы, әсәй кешенең ҡолағына ғына: "Белогорячка был, тиҙ арала дауаханаға оҙатырға кәрәк", - тине.

- Ни хәлгә төштө алтындарҙан-алтын ғына улым, - тип бөгөлөп төштө Нәзирә.

Ауылдашы Нурислам хәлде рәсми телдә аңлата башлағас, Фәрит ағайҙың күңеленә берсә шом инде, берсә бар донъяға асыуы килде.

- Ағас төбөндә минең улымды һағалап ултырмағандарҙыр бит?

- Кемдер әйткәнме, киҫелгән ағас төбөн үҙҙәре килеп тапҡанмы, уныһын белмәйем, ағас йығылыуы тураһындағы хәбәрҙе хоҡуҡ һаҡлау органдарына райондың прокуроры ярҙамсыһы Лаврентьев рапорт рәүешендә еткергән. Поляковкала, силсәүиттә, штраф түләргә тигән ҡарарҙы бына минә тотторҙолар. Аралбаев Фәнил ҡырҡҡан тип асыҡтан-

* * *

- Аралбаев Фәнил бында йәшәйме? - полиция лейтенанты Нурислам Ихсановтың оҙон кәүҙәһе күренгәс, Фәрит ағай ҡаршы сыҡты.

- Белмәгән кеше һымаҡ һин дә, - тип ике ҡуллап күреште.

- Эш менән йөрөйөм, шуға рәсми тел менән һөйләгән булам. - . Һаулыҡ алып яйлап ултырғас, Нурислам, бөгөн бигерәк эҫе, тип бер сынаяҡ һыу һорап эсте. Шунан папкаһын асты. - Аҫһаң аҫ, һуйһаң һуй, Фәрит ағай, улыңды аристовать итергә килдем.

- Фәнилдеме? Ни ҡылған шильма малай? - насар уйҙарын ҡыуырға тырышып, атай кеше көләмһөрәгән булды.

- Әйтһәм, атаһың һин мине, Фәрит ағай.

- Йә, көттөрмә.

- Йәнекәйҙә ҡарағас йыҡҡан.

- Ҡасан?

- Ҡайныңды, Ситдиҡ бабайҙы ҡуйған көн.

Фәрит ағай аптырап китте.

- Ҡәбер бураһына тип берәүҙе ауҙарғандыр, шунан?

- Ауҙарырға ярамай бит. Закон шулай. Ҡарағас "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән.

- Ярамаһа, ярамайҙыр, тик ҡәбергә берҙе ауҙарабыҙ инде. Уныһы законға ҡарамай. Ололар ҡәберҙе ҡарағастан бурап ҡәртәләүҙе хуплай ҙаһа. Мәҫәлән, атайым да бының өсөн ағасты алдан әҙерләгәйне. Нишләп был хаҡта алдан иҫкәртмәгәндәр икән һуң? - йөҙө был хәбәрҙән салышайып китте.

- Ҡағыҙса әйткәндә, былай була инде ул, - папкаһынан бер бит ҡағыҙ тартып сығарҙы лейтенант. - Законһыҙ ағас ҡырҡып кәсеп итеүселәрҙе тотоу һәм язаға тарттырыу маҡсатында ойошторолған тикшереү барышында беҙҙең участка урмансылығында 0,961 кубометр ҡарағас ҡырҡылыуы асыҡланған. Операцияла район прокуратураһы хеҙмәткәре һәм урмансылыҡ буйынса мобиль төркөм, шулай уҡ үҙәктең "Деревопром"корпорацияһы вәкилдәре ҡатнашҡан.

асыҡ яҙғандар, тимәк ... оҙон телдәр эшенә лә оҡшаған, - Нурислам туҡтап уйланып алды. - Ысынлап та ошаҡҡа оҡшаған был, кемдең эше икән?

- Йөрөнө, олатаһының ҡәберенә бура бураны лаһа. Законһыҙ ҡырҡыу имеш. Ул прокурорҙар үҙҙәре ғүмер эсендә бер төп ағас ултыртҡандары бармы икән? Штрафы күпме?

- Әйтһәм, йығылаһың.

- Әйт, күпме? - йөҙө ныҡ ҡырыҫланды өй хужаһының.

- Законһыҙ ағас ҡырҡыуҙан килгән зыян 59 мең 600 һумға баһалана.

- Бына һиңә Шәрифәнең тишек ҡомғаны, ул тиклем аҡсаны ҡулда ла тотоп ҡараған юҡ, үҙе дүрт-биш ат хаҡы лаһа, - Фәрит ағай ултыра төштө. - Түләй алмаясаҡ ул уны.

- Ул саҡта төрмә, йә йортон, милкен тартып аласаҡтар, - Нурислам был һөйләмде шым ғына әйтте. Әйтерһең, уларҙы кемдер тыңлап тора.

- Күрәһеләр бар икән. Уның йорто ла юҡ, бисәһе, балаһы ла... - тине атай кеше. Үҙ-үҙенә әйтте шикелле. - Ҡайным да инде, үлмәй торорға була бит...

"Йә Хоҙай, тормошобоҙ ошо бер ҡарағас көнөнә ҡалдымы икән?! Илдә кемдәрҙер ғүмер буйы халыҡ иҫәбенә байлыҡ туплай. Улар бер ағас түгел, миллионлаған, хатта миллиардлаған һум аҡса урлай, ә һыуҙан ҡоп-ҡоро сыға, бер ниндәй штраф та түләмәй, яза ла күрмәй. Закон алдында яуап биргәндәре лә, төрмәлә ултырғандары ла ярлыҡана. Ә ҡайһы берәүҙәргә, беҙгә, ябай кешеләргә, хатта яҡты донъя менән хушлашҡандан һуң да тынғы юҡ. Ни ғилләһуң ул, ә? Ҡәбер бураһына тип алынған бер ҡарағас өсөн йөҙәтмәкселәр. Аңламаҫһың был донъяны. Үҙең ҡарап-ҡурсып үҫтергән ағас бит әле.

Ауыл кешеләренең төп кәсебе урмансылыҡ булды. Ағас ҡырҡтылар, таҡта ярҙылар, ылыҫ оно етештерҙеләр, сайыр ағыҙҙылар... Ашаған аш та, ташыған таш та ошо ағас ине. Хәҙер шул ағас өсөн төрмәгә алып барып тыҡһындарсы. Башҡа һыймаҫ хәл был. Бына, урман һатылып бөткәс, эш юҡ. Алыр байлыҡтары ҡалмағас, халыҡты талайҙар икән бөгөн. Улымды эшһеҙ ҙә ҡалдырҙылар, хәҙер салбарын да сисеп һалдырмаҡсылар. Былай ҙа тишек нәскиҙә йөрөй. Нишләр инде?" - төрлө уйҙар килде күпте күргән, күпте кисергән атай кешенең башына.

Өмәләр үткәреп, таҙалап үҫтергән урмандарына үҙҙәре хужа булмағанға йөрәге әрней уның. Ситтәргә, бигерәк тә өҫтәгеләргә, "йәшел ҡалҡан" яҙмышы ҡыҙыҡ түгел шул. Уларға иң яҡшы ағастар китеп торһа, шул булған. Ә урманды улар хәстәрләй, йыл да ҡарт-ҡоро, балалар менән үҫентеләр ултырта. Бөгөн унан да мәхрүмдәр.

"Был хәлде ҡайным белеп ҡалһа, иллаһи-биллаһи, ҡәберҙән тороп ултыраҫаҡ бит. Үлмәй торорға кәрәк булған да... Тәҡдир инде, тәҡдир".

Фәрит ағай өҫтәлдән бер һыныҡ икмәк алды:

- Бына икмәк, Нурислам ҡустым, ошо изге ризыҡ менән ант итәм, - өй хужаһы икмәкте иренәнә терәп торҙо, ә күҙҙәренән эре бөрсөк булып тамған йәш ҡулға тейеп аҫҡа табан ағып китте, - ғүмерем эсендә хөкүмәт ҡаҙнаһына ла, кеше әйберенә лә тейгәнем юҡ. Үҙ көсөм менән йыйғанымды, хәләл ризығымды ғына ауыҙыма алам. Улым да шулай. Эсә тиһәләр ҙә, һис ҡасан урлыҡҡа барманы, бармаҫ та. Намыҫ таҙа беҙҙең. Выждан да...

Нурислам бик уңайһыҙланып китте. Фәрит ағайҙы ҡосаҡлап алды:

- Беләм, беләм, ағай, намыҫың таҙа. Тик ни хәл итмәк кәрәк... законды белеп етмәйбеҙ шул.

Оҙаҡ ҡына тын ҡалып ултырҙылар. Алдағы билдәһеҙлек икеһен дә уйға һалдымы, әллә донъяның ғәҙелһеҙлеге, борондан килгән йолаларҙың бөгөнгө замандың ҡаты закондары алдында тапалып юҡҡа сығыуы бер минутҡа ғына булһа ла туҡтап һығымтаға килергә саҡырҙымы - ике ир уҙаман ҡурсаҡ кеүек ҡатып ултыра бирҙе. Ысынлап та, бәлки, был аяуһыҙ закондар алдында үҙҙәрен ҡурсаҡ итеп тойғандарҙыр ҙа, кем белә.

Бер аҙҙан, ҡайтҡас та Фәнил минең эшкә йә өйгә килһен, йәме, тип лейтенант сығып китте.

Урманға умарталарын ҡарарға киткән Фәнилде Рәүеф барып алып килде. "Һине полицай Нурислам ағай саҡырта", - тигәс тә, Фәнил, сауҙагәр Хаммат, һүгенеп бармаҡ күрһәткән өсөн, ялыу-фәлән яҙҙымы икән, тип уйланы. "Ышан уға, өс шешәлек бурысты, йәки сумманы урланы, тип яр һалһа ла аптырамаҫһың. Ярата ул ана шул погонлы ағайҙар аша эш итергә лә, үс алырға ла".

- Бер ҡашың ҡайҙа булған? - Уны күргәс тә Нурисламдың тәүге һорауы шул булды.

- Ныҡ һикерә ине, шуға ҡырҙым.

- Ә быныһы?

- Быныһы тыныс, шуға иҫән.

- Ҡырылған ҡаш кеүегерәк бит әле үҙеңдең хәлдәрең. Тә-әк, 29 май Йәнекәйгә менеп бер ҡарағас ауҙарып төштөңмө? - һынамсыл ҡарашын ташланы.

- 29-ы? Олатайҙы ҡуйған көнмө ни? Әлбиттә, олатай үҙе ҡушты, мин үлгәс, һылыу булмаған ҡарағасты ҡырҡып бура бурарһың, тине, - әһә, Хамматтың бында ҡыҫылышы юҡ икән, тип бер аҙ тынысланып та ҡуйҙы Фәнил. Өс шешәлек бурыстың алдағы эш алдында ни тиклем сүп һәм пүстәк икәнен белмәй ине ул.

- Һылыу булған шу-ул. Ны-ыҡ һылыу булған. Хәҙер шуға штраф һалалар. Кемдән рөхсәт һораның?

- Бер кемдән дә һораманым. Һорарға кәрәк инеме? Береһе лә һорағаны юҡсы.

- Их, аңра баштар. "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән ағастың башына еткәнһегеҙ бит. Кем менән ауҙарҙың?

- Шамил менән барып бурағайныҡ. Штрафы күпме ни?

**(Дауамы бар).**

✓ *Йәлләү, тигәндән, күп йәлләнеләр мине. Өйҙә йәлләнеләр, эштә йәлләнеләр. Йәлләтә лә белгәнмендер, меҫкен булып башты эйгәнмендер. Әммә кешеләр алдында башым эйеүем араҡы алдында теҙ сүгеүҙән ине.*



ТӘҮБӘ

**Һүҙҙе шунан башлайыҡ: эсеүҙе ташлау ҙур батырлыҡ түгел, уны һәр кем булдыра ала. Ҡыҙыҡ өсөн таныштарҙан һорашып сыҡтым. Тәүге эскән көндәрен бөтәһе лә яҡшы хәтерләй. Әйтерһең дә, ҙур ваҡиға булған. Ташлаған көн ҙур ваҡиғаға әйләнһен ине! Аллаға шөкөр, Шешәбикәне ташлауыма алты йыл тулып уҙҙы. Шаяртам - ике йыл ғына. Һуғышта бер йыл өс йылға һанала бит. Улайға китһә, айыҡ тормош өсөн дә көрәшергә, үҙ-үҙең, тирә-йүндәге мөхит менән туҡтауһыҙ дәғүәләшергә кәрәк бит. Ә был һуғыштың да ниндәйе бит әле! Эскелекте ташлауыма күп ваҡыт та үтмәгән, һығымталар яһарға иртәрәк тә һымаҡ. Әлегә шуныһы мөһим: Иблис ҡотҡоһонан ҡотола алдым, алдағыһы ваҡыт хөкөмөндә.**



# ҠОТОЛАЙЫҠ...

## иблис ҡотҡоһонан

Башҡалар кеүек, мин дә тәүге эскән көнөмдө яҡшы хәтерләйем. Ун алты йәш ине миңә ул саҡта. Һабантуйҙан һуң булды ул. Тиҫтерҙәрем менән алдан һөйләшкәнсә, ҡараңғы төшкәс, бер яртыны ҡуйынға тығып, быуа буйына төштөм. Ҡыҙмаса "егет" булып алған синыфташтарым ҡыуанып ҡаршы алды. Ни тиһәң дә, һынауға килгәнмен - эсә лә белмәгән маңҡа малайҙан улар кеүек "егет" булырға ниәтем. Ҡойоп та бирҙеләр, шәрбәтле шарапты түңкәреп тә ҡуйҙым. Бүстәк! Иң ҡурҡҡан нәмәм - иҫереү. Шуға күрә һәр рюмканан һуң быуаға төшөп, бит-ҡулды сайҡап, йыуынып алам - бирешмәҫкә, йәнәһе. Ҡайҙан!

Яйлап-яйлап күңелле була башланы, йыуыныу ҡайғыһы ла китте. Ни эшләптер, урыҫса һөйләшә башланым. Ни эшләп тип ни, барыһы ла шулай итә ине шикелле. Шуныһы иҫтә: һупалау бик шәп сыға һымаҡ. Әйтерһең дә, ғүмер буйы урыҫтар араһында йәшәгәнмен. Иҫерек килеш башҡортса һөйләшеү ятышһыҙ кеүек.

Аҙаҡ күрше ауылға барҙыҡ, тансала булдыҡ, урам буйлап ҡосаҡлашып йырлап йөрөнөк, таҡмаҡтар әйттек. Күңелле ине, билләһи! Шулай йәрәпләшеп кителде, һәр шәмбе һайын "батырайып" ала инек. Әрмелә саҡта ауыҙға ике тапҡыр ғына эләкте. Студент саҡтарымда, унан һуң да эсмәнем тип әйтә алмайым. "Башҡа башҡорттар эсмәһен", ти ҙә эсә инек.

Бахмурҙың ни икәнен бер туйҙан һуң белдем. Унда мин кейәү үңгәре булып барғайным. Килен аласаҡ ауылдың егеттәре менән алдан һөйләшеп ҡуйҙыҡ: ҡыҙ өсөн тартыш ваҡытында йығылғансы эсергә. Егеттәр риза булды. Алдан бер аҙ майлап та ҡуйҙыҡ. Ҡыҙҙарҙы еңеп буламы ни! Улар мине аяҡтан йығырға тырыша, мин уларҙы. Ҡара-ҡаршы таҡмаҡ, тостар ҙа әйтешәбеҙ, кем-кемде еңер, ярышып эсәбеҙ. Ҡыҙ өсөн тартышҡанда ҡыҙҙарҙы ҡосаҡлайым да, ҡолайым. Ҡыҫҡаһы, йолаһын үтәнек - ҡыҙҙы алдыҡ. Ямғыр яуып үткәйне. Батҡаҡҡа буялып бөттөк, ләкин күңелле ине, билләһи!

Иртәгеһен... уянып китһәм, иҙәндә ятам. Торайым тиһәм, башты төкөнөм. Баш эшләмәй. Нисек инде, түбә таҡтаһына буйым етәме әллә ул? Баҡтиһәң, өҫтәл аҫтында ҡунаҡлағанмын икән. Көсхәл менән тороп, тышҡа сыҡтым. Кейәү егете рюмка, закуска тотоп, эргәгә йүгереп сыҡты. Баш төҙәтергә, йәнәһе. Ҡайҙа ул, араҡыға ҡарағы ла килмәй. Тәнем һыуынып, үлеп барған кеүекмен. "Ошонан үлмәһәм, ҡабат эсмәйем", - тип үҙ-үҙемә вәғәҙә бирәм. "Улайһа, һыу эс", - тип кейәү кеше ижау менән һыу алып сыҡты. Һыуһатҡайны. Ҡабаланып эсеп ебәрҙем. Һыу тигәнем араҡы булып сыҡты. Батты бит, маңлайға тир бәреп сыҡты. Тәүге тапҡыр шынаны шына менән һуғып сығарыуҙы, йәғни баш төҙәтеүҙе шунда белдем. Ундай хәлдәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңынан күп буласаҡ.

Икенсе үлә яҙыуым яҡын дуҫыбыҙҙы ерләгәндән һуң булды. Республикала нык танылған кеше ине ул. Уны һуңғы юлға оҙатҡандан һуң тағы ла бер дуҫтың аулаҡ фатирында йыйылдыҡ. Икенсе көндө хәлдәрем хөртәйеүен аңланым. Өҫтәл тулы араҡы. Баш төҙәтеүҙән уҙғанмын - араҡыға ҡарағы ла, эске лә, бер ни тураһында уйлағы ла килмәй. Тулы апатия һәм бушлыҡ. Мәрхүм дуҫым артынан китерҙәй ҙә булып бөттөм хатта. Ғаиләм тарҡалған, ҡатын менән айырылышҡанбыҙ, улымды өләсәһе менән олатаһы ҡарар, тип уйлап ятам. Шул уҡ ваҡытта үҙемде йәлләйем. Эгоисмындыр инде. Дуҫтар ҙа мине йәлләне. Тәнемде, табандарымды араҡы менән ыуып, юрғанға төрөп һалдылар. Йылынып, ойоп киткәнмен. Аҙаҡтан хәл ингәс, тағы ла шынаны шына менән һуғып сығарҙым. Күңелһеҙ ине, әммә йәшәгем килде.

Йәлләү тигәндән, күп йәлләнеләр мине. Өйҙә йәлләнеләр, эштә йәлләнеләр. Йәлләтә лә белгәнмендер, меҫкен булып башты эйгәнмендер. Әммә кешеләр алдында башым эйеүем араҡы алдында теҙ сүгеүҙән ине. Эскән кешенән дә меҫкен кеше юҡ был донъяла.

Төрлө урындарҙа эшләргә тура килде. Район кимәлендәге ярайһы уҡ вазифалы урындарҙа ла. Эште мәктәптән башлағайным, кире мәктәпкә ҡайттым. Белемем буйынса башҡаса тәгәрәр урыным ҡалманы. Төрлө урындарҙа эшләгәс, шешә артында аралашыу мөхите лә киңәйҙе. Берәй көн юғары кимәлдәге банкетта йәиһә ҡунаҡта булһам, икенсе көнө асарбаҡтар менән эсеүҙән дә тартынмай башланым. Тағы шуныһы бар: шешәләштәрем гелән ир затынан булды. Ҡатын-ҡыҙҙың эсеүен бөтөнләй кисерә алмайым. Хатта ҡунаҡ ваҡытында ла эскән ҡатын-ҡыҙ йәмһеҙ күренә. Эскән әсәйҙән, төшөрөргә яратҡан ҡатындан Хоҙай һаҡлаһын! Балалар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Аллаға шөкөр, был яҡтан минең барыһы ла яҡшы. Ғаиләлә айыҡлыҡ булмайынса, тәүбәгә килеү, ай-һай, ҡыйындыр.

Әлбиттә, гел генә йәлләп тә торманылар. Нотоҡ уҡыусылар ҙа, кәңәш биреүселәр ҙә күп булды. Бөтәһен дә ихлас ҡабул итә инем, тик ынғай һығымта яһаған хәлдә лә, тумыртҡа тәүбәһенә әйләнгәйнем. Бөтөн коллектив алдында минең персональ эште тикшереү күңелгә нык уйылып ҡалған. Иҫкә төшһә, әле лә тән сымырҙап китә. Был спектаклдә минең йөҙҙө йырттылар, рисуай иттеләр, аяҡ аҫтарына һалып тапанылар. Кемдең ялҡауы килмәй, барыһы ла әрләне: директор ҙа, завуч та, профкомы ла, кисә генә бергә эскән шешәләштәр ҙә. Бигерәк тә бер ҡатын төкөрөгөн мул сәсте. "Һинең ирең йыл һайын дауаланһа ла, эскеһен ташлай алмағанына мин ғәйепле түгел", - тип әйтке килә лә ул... Ҡыҫҡаһы, тапанылар, бысраҡ өйҙөләр, иҙҙеләр. Ә мин һуңғы "двоечник" кеүек башты аҫҡа эйеп, әйтелгәндәрҙе ҡабул ҡылдым. Тәүбә итеү өсөн һуңғы һүҙ бирҙеләр. Иң ауыры шул булды. Сценарий буйынса "Башҡаса улай итмәм", тип әйтергә тейешмен. Чацкийҙың тауышы менән: "А судьи кто? Карету мне, карету!" - тип ҡыҫҡырырға уйланым. Ләкин ҡайҙа ул беҙҙә ундай дворяндар ғорурлығы. Спектакль уңышлы тамамланды. Унын һөҙөмтәһе уҙа барһа бер-ике айға еткәндер. Былай ҙа эш килеп сыҡмағас, директор "ат менән йөрөнө" һәм мат ҡуйҙы. Һаман да рәхмәтлемен уға. Башта ул минән үҙ теләгем менән эштән китеү тураһында ғариза яҙыуымды һораны. Яҙҙым, ҡултамғамды ла ҡуйҙым.

- Числоһын ҡуймай тор, һиңә һуңғы шанс бирәм, - тине директор.

- Ышанысығыҙҙы аҡлармын, - тинем мин шул саҡ күҙ алдымда баҙлаған өмөт утын күреп.

**Мораҙым ӘХМӘТОВ.**
**(Дауамы бар).**

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Үлтермә!

Бер йәш ҡатынды ерләргә барҙыҡ. Яңы тыуған балаһы ҡалды. Ҡайғынан шаңҡыған иргә эйәреп, йорт алдына сыҡтым.

Ул тәмәке ҡабыҙҙы:

- Ҡатынымдың бына ошолайтып ҡапыл ғына китеп барыуында кемде ғәйепләргә лә белмәйем. Ауырға ҡалғас, дауаханаға китте. Беҙ ҙә уның етди сирен белә инек, табиптар ҙа ҡәтғи рәүештә аборт яһарға тәҡдим иткәндәр. Коридорҙан китеп барғанында кушетҡала ултырған ят әбей ҡалҡҡан да артынан эйәрә төшөп, инәлеп, мөрәжәғәт итә икән:

- Ҡыҙым, Алла хаҡына үтенеп һорайым, үлтермә тыуасаҡ баланды, йәненә ҡара ҡарғыш, ауыр гонаһ алма!

Ҡатыным һиҫкәнеп әбейгә текәлгән, теге лә аптырап ҡалған башта, шунан аҡлана икән:

- Ғәфү итегеҙ берүк, һеҙҙе үҙемдең ҡыҙым менән бутаным. Ул да бында ята. Бөгөн абортҡа барырға тейеш ине...

Ҡатыныма етә ҡалған, ул палатаһына кире боролған. Аҙаҡтан табиптар ҙа, мин дә алдына алған, кире ҡаҡҡыһыҙ хәл иткән ҡарарынан кире һүрелдерә, дүндерә алманыҡ. Инәлеүгә, үтенеүгә доға ятлағандай бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлап яуаплай:

- Теге миңә тап булған ҡарсыҡ әсәйем мәрхүмәгә нык оҡшаған ине. Бәлки, ул теге доньянан килеп, мине һағалап ултырғандыр, бәлки, күҙемә генә күренгәндер, белмәйем, әммә ул үҙәләнеп, баланды үлтермә, балам, тине. Ниндәй генә хәлдә ҡалһам да уның үтенесен үтәйем. Мин үлтереүсе түгел! Түгел!

Ир ауыр уфтанды:

- Бына күрәһең бит, балам ҡалды, ҡатыным юҡ. Бәлки, ул хаҡлы ла булғандыр, Ҡөрьәндә лә "Үлтермә!" тип яҙылған бит. Кешене, хатта тыуасаҡ кешене үлтерергә ярамай, үҙеңдең ғүмереңде фиҙа ҡылған хәлдә лә!

### Ҡыҫынҡылыҡ

Өйләнешкәс, дөйөм ятаҡта йәшәнеләр. Бер өҫтәл, ике ултырғыс тимер карауат һыймалы ҡыҫынҡы ғына өкәлтәктә. Шунан аҡса йыйыштырып, кредит алып, бер бүлмәле фатирлы булдылар. Бында ла артыҡлап иркенләрлек түгел ине. Хәлдәрен белешһәм, хәбәрҙе шунан башлай: "Аҡса еткереп булмай ҙа ҡуя, һаман да теге тимер карауат, шунда киленең менән сейәлешеп йоҡлап йөрөйбөҙ әле!" Күптән түгел фатирҙың еллеһен, ҡала уртаһындағы дүрт бүлмәлеһен һатып алдылар. Балалары уҡыуҙы тамамлап, ситкә киткәйне, икәүҙән-икәү генә тороп ҡалдылар. Урамда тап иткәйнем, ҡыуанып һөйләп торҙо:

- Икебеҙгә иркен дүрт бүлмә, көн һайын шуларҙа сиратлап ҡунып сығабыҙ. Айырымланып.

Ҡунаҡ йыйҙыҡ. Ситтән килеүселәрҙе ҡайтарманыҡ. Ҡунаҡсыллыҡ күрһәтергә теләп, теге танышымды ла ҡыҫтаным:

- Таңға ҡарай йонсоп йөрөгәнсе, ҡалығыҙ ҙа ҡуйығыҙ. Күңел киң булһа, ултырышты терәр урын табыла ул.

- Йоҡлау өсөн хәҙер беҙгә айырым бүлмәләр кәрәк икәнлекте беләһең дә инде.

Әллә уйындағын әйтте, әллә шаяртып, аңғарманым.

Хушлашып ҡайтып киттеләр. Үҙҙәренең фатирында йоҡларға. Иркен бүлмәләрҙә. Айырымланып.

Бер-берендән һыуынмау, биҙмәү, яҡыныраҡ булыу өсөн, етешһеҙ, мохтаж, ҡайһылыр кимәлдә ҡыҫынҡы көн итеү ҙә кәрәктер ул ҡайһы саҡта.

✓ *Кредит алыу яҡлы түгелмен. Дөрөҫөрәге, шулай килеп сыҡты, банктан ипотека кредиты ла ала алмағайным ваҡытында. Аллаһы Тәғәлә һаҡлаған тип кенә ҡарайым был хәлгә. Йәйлап йорт та төҙөнөм, бер ниндәй кредит та кәрәкмәне.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# БЕЛЕП ШАЯРТ

■ Билдәле булыуынса, бысраҡ һауа когнитив күрһәткестәрҙе, эшкә һәләтлелекте түбәнәйтә, дөйөм алғанда, һаулыҡты ҡаҡшата. Хәҙер ғалимдар ул кәйефкә лә йоғонто яһай, тип белдерә. Массачусетс технология институты мәғлүмәттәренә ярашлы, һулаған һауаның кешенең ниндәй ҡарарҙар ҡабул итеүенә ҡыҫылышы бар, имеш. Һауа бысрағыраҡ булған һайын, кеше үҙен насарыраҡ тоя, төшөнкө күңел һәм хәүеф тойғоһо уйланылмаған ҡарарҙар ҡабул итеүгә килтерә икән. Был Ҡытай ҡалаларында һауа бысраныуы тураһындағы мәғлүмәттәр булған көндәрҙә ошо территорияла урынлашҡандарҙың социаль селтәрҙәрҙә үҙҙәрен агрессивыраҡ тотоуынан сығып баһаланған. Бигерәк тә бысраҡ һауа ҡатын-ҡыҙҙар һәм юғары килемгә эйә булыусыларҙың хис-тойғолары менән "уйнай" икән, улар был мәлдәрҙә үҙҙәрен күпкә бәхетһеҙ тоя.

■ Йәшел урман - оҙон ғүмер сығанағы, тип белдерә Дьюка менән Герцог Куньшань университеттары хеҙмәткәрҙәре. 14 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәрҙә 24 меңгә яҡын кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 79,5 проценты ауыл ерлегендә йәшәгән. Йорто урман эргәһендә урынлашҡандарҙың ғүмере лә оҙон булыуы асыҡланған. Әйткәндәй, йәшеллек балаларҙың мейе үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһай икән. Һөҙөмтәлә, балаларҙың хәтере яҡшыра. Һынауҙарҙа 253 уҡыусы ҡатнашҡан. Башланғыс класс уҡыусыларының урманға яҡын йәшәү һөҙөмтәһе булып уларҙың яҡшы уҡыуы, хәтеренең ныҡ булыуы торған. Психологтар әйтеүенсә, урман психика өсөн дә файҙалы. Ул тикшеренеү эшмәкәрлеген, фантазияны үҫтерә. Бынан тыш, был райондарҙа һауа ла таҙараҡ, шау-шыу ҙа юҡ.

■ Шаяртыуҙың да сиге була. Әгәр ҙә ғаиләлә ир менән ҡатын бер-береһенән көлә икән, был уларҙың араларын һыуытыуы ихтимал. Парҙар араһында шаяртыу бик мөһим, сөнки ул мөнәсәбәттәрҙе нығыта йә тарҡата ала. Шулай уҡ шаяртыу мөнәсәбәттәрҙең күрһәткесе булып тора. Канзас университеты ғалимдары билдәләүенсә, романтик мөнәсәбәттәрҙә шаяртыуҙар кәрәк. Тик парҙар бер-береһенән түгел, ә бер үк нәмәләрҙән көлөргә тейеш. Был уларҙың бер-береһенә тартылыуын нығыта ғына. 150 мең кеше ҡатнашлығындағы тикшеренеүҙәр ошоно күрһәткән. Шул да ҡыҙыҡ: әгәр ҙә берәү шаярта белә һәм уның шаяртыуҙары башҡаларға ҡыҙыҡлы икән, был уның мөхәббәттә бәхетле буласағы тураһында һөйләмәй әле. Икәүләп көлөргә өйрәнергә кәрәк. Шулай уҡ һөйгәнеңде рәнйәтә алған шаяртыуҙарҙан тыйылырға кәңәш ителә.

■ Корнелл университеты ғалимдары йәшел сәйҙе крандан алған һыуға түгел, магазиндан һатып алғанында бешерергә кәңәш итә. Был сәйҙең файҙалы сифаттарын һаҡларға, антиоксиданттарҙы ике тапҡыр арттырырға ярҙам итә. Шулай ҙа ябай һыу менән бешерелгәне тәмлерәк була. Йәшел сәйҙә булған тәбиғи антиоксидант баш мейеһенә һәм йөрәккә файҙалы. Алда әйтелгән ике төрлө ысул менән бешерелгән сәйҙе тикшереп ҡарағандан һуң, шул асыҡланған: был матдә крандағы һыуҙа бешергәндә түбәнәйә икән. Ҡара сәйҙә файҙалы матдәләр бөтөнләй юҡ тиерлек, сөнки әҙерләү процесындағы әсетеү уларҙы юҡҡа сығара. Ә крандағы һыу кальций, магний һәм тимер кимәле юғары булыуы арҡаһында антиоксиданттарҙы кәметә.

*ҠУЛДАН КИЛӘ!*



# МИН НИМӘГӘ ҺӘЛӘТЛЕ?

## Шуны һынарға яратам

**Бар кеше лә эшҡыуар булып китә алмай, тиергә яратабыҙ. Әммә ошоға тиклем ғалимдар "эшҡыуарлыҡ гены"н асыҡлағаны юҡ әле. Тимәк, кеше үҙендә һәр төрлө сифатты ла тәрбиәләй ала. Иң мөһиме, теләк, тырышлыҡ һәм маҡсатҡа өлгәшә белеү кәрәк. Күгәрсен егете - эшҡыуар Вадим ӘЛМӨХӘМӘТОВ та ошондай фекерҙә. Уның үҙ тәжрибәһенән сығып биргән яуаптары, бәлки, кемгәлер үҙ эшен булдырыуға этәргес булыр?**

➔ **Эшҡыуарлыҡҡа кеше аҡсаһы күп булғандан түгел, аҡсаһыҙлыҡтан һәм сараһыҙлыҡтан килә, тигән фекер бар. Һеҙгә был эшкә тотонорға нимә этәргес булды?**

- Моғайын, ирекле булырға теләү тойғоһолор. Әрме сафтарында хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң, Себергә китеп эшләп ҡараным. Шунда мин үҙ ереңдә йәшәү һәм эшләүҙең кеше өсөн ни тиклем мөһим булыуын аңланым. Бигерәк тә ир-егет өсөн. Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы шулай, ул йышыраҡ төшкән ерендә ерегә. Ә ир кешегә күңел тыныслығы өсөн үҙ ерендә баҫып тороу мөһим. Үҙ-үҙемә эшләп ҡарау теләге лә көслө ине. Еңел машинала Мораҡтан Өфөгә кеше йөрөтөп тә алдым. Баш ҡалала йәмәғәт автобусында водитель булып та эшләнем. Кеше ғүмере һәм сәләмәтлеге өсөн яуаплы эш, ә ял итеп өлгөрмәйһең, йыш ҡына йоҡо ла туймай. Шуға унан баш тартырға булдым. Ошолай эҙләнеүҙәрҙән һуң йөк ташыу машинаһы алып, районға ҡайттым. Бының өсөн еңел машинаны һатырға тура килде. 2011 йылдан ошо йөк ташыу өлкәһендәмен.

➔ **Был беҙҙең ғаилә бизнесы, тип тә әйткәйнең шикелле?**

- Эйе, был беҙҙең ғаилә бизнесы. Тик башта унда мин килдем һәм йыл, йыл ярымдан һуң, эш күбәйгәс, атайымды ла саҡырҙым. Ул бер эшҡыуарҙа эшләп йөрөй һәм автобус водителе ине. Үҙенә Газель һатып алды ла, эшләй башланыҡ. Әммә башта ул ныҡ шикләнде. Сөнки совет осоронда йәшәгән һәм эшләгән кешеләрҙең һәр береһенә хас булғанса, хөкүмәттән дә уңайлыраҡ эш биреүсе юҡ, тигәнерәк юҫыҡта фекер йөрөтә ине. Хәҙер ҙә, 7 йыл үткәндән һуң, төрлө идеялар тәҡдим итеп ҡарайым, барыбер ҡурҡыңҡырай тотонорға.

➔ **Эшҡыуар булыр өсөн үҙеңдә ниндәй сифаттарҙы үҫтерергә кәрәк?**

- Иң тәүҙә сабырлыҡ кәрәк. Сабыр иткән - моратына еткән, ти халыҡ. Эш башлағанһың икән, аҙаҡҡа тиклем барырға кәрәк. Ҡайһы бер кеше түҙмәй, йәки үҙенә ышанмай, килеп сыҡмаҫ, тип уйлай. Әлбиттә, мин дә ҡайһы берҙә уйланам, әммә үҙ-үҙеңде еңергә кәрәк. Тағы ла шундай ғәҙәтем бар - нимәгә һәләтле булыуымды һынарға яратам. Үҙ-үҙемә саҡырыу ташлайым инде. Ҡаршылыҡтар бөтөн эштә лә осрап тора ул, уларға артыҡ иғтибар бирмәҫкә кәрәк. Машинамдың бензин багына тоҙ ҙа һалдылар, башҡа күңелһеҙлектәр ҙә булды. Бөгөн мин уларҙы көлөп кенә хәтергә алам. Спиртлы эсемлектәрҙән баш тартҡанмын, бер йыл диндәмен, былар миңә ярҙам ғына итә.

➔ **Эш башлап ебәреү өсөн кешегә яҡынса күпме бол кәрәк?**

- Мин, мәҫәлән, 2011 йылда иҫкерәк кенә Газель машинаһын 300 меңгә алдым. Әле уны яңыртманым, ҡараштырып ҡына торам. Ниндәй эшкә тотоноуыңа ҡарап, иң кәмендә сама менән 400-500 мең кәрәктер. Иң еңеле шул: алып һатыу бит инде. Ә башҡа өлкәләр, продукция етештереү менән бәйле булғандары күберәк аҡса талап итә. Күгәрсендә фермерҙар, ике ауылда - Ишбирҙелә һәм Дауыт-Ҡайыпта йылҡы тотоп, ҡымыҙ етештереүселәр бар. Милли ризыҡтар етештереү йүнәлеше, хатта үҙебеҙсә икмәк бешереү өлкәһе лә тәүәккәл һәм ҡыйыуҙарҙы көтә. Үҙем кредит алыу яҡлы түгелмен. Дөрөҫөрәге, шулай килеп сыҡты, банктан ипотека кредиты ла ала алмағайным ваҡытында. Аллаһы Тәғәлә һаҡлаған тип кенә ҡарайым был хәлгә. Йәйлап йорт та төҙөнөм, бер ниндәй кредит та кәрәкмәне. Шуныһы ла бар: эш башланым да, шунда уҡ килем килә башлай тип уйларға ярамай. Минең йыл ярымдан һуң ғына килем ҡулға элә башланы.

Әйткәндәй, беҙ хәҙер үҙ-ара берләшеп, бер-беребеҙгә ярҙам да иткеләйбеҙ. Мораҡта бер егет кафе асҡайны. Уны хәләл кафеһы итеп үҙгәртергә үҙе лә риза, беҙ ҙә быға булышлыҡ итергә уйлап торабыҙ. Шуны ла әйтергә кәрәк, эш асыу өсөн аҡса ғына түгел, район хакимиәтенең рөхсәте лә, аңлауы ла кәрәк. Эшҡыуарҙарға беҙҙә юлдар асыҡ, әлегә хакимиәт тарафынан ҡаршылыҡҡа осраған бер генә хәлде лә ишеткәнем юҡ.

➔ **Эшҡыуарҙар бөгөн ниндәй ярҙамға мохтажлыҡ кисерә?**

- Иң ҡиммәте - идея, тиҙәр бит. Үҙ-ара берләшеп, "Ҡыпсаҡ" ойошмаһы булдырыуыбыҙ ҙа бер-беребеҙгә ярҙам итеү маҡсатынан. Бәлки, кемгәлер һүҙ, кемгәлер матди ярҙам кәрәктер. Эшен күптән яйға һалған тәжрибәле эшҡыуар ағайҙар ҙа шылтыратып, бәйләнешкә инделәр. Эшҡыуарҙар күп ул беҙҙә, ағас ярыу цехы тоталар, шул уҡ ауыл хужалығы йүнәлешендә эшләйҙәр. Беҙҙең район егете Өфөлә Yamaha-үҙәк тота әле. Хәҙер йыйын үткәрергә планлаштырабыҙ. Эш башлағанда бит ул һәр ярҙам да мөһим. Финанс, юридик һ.б.

➔ **Финанс йәһәттән ирекле булыу өсөн булған килемеңдең ун өлөшө менән бүлешергә кәрәк, тигән ҡағиҙә бар. Һеҙ быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Уға бик ыңғай ҡарайым. Эшҡыуар булһаң да, булмаһаң да, беҙҙең халыҡта былай ҙа саҙаҡа, хәйер биреү йолаһы бар. Кешегә үтескә аҡса биреп тороу йолаһы ла онотолмаған әле. Минең, мәҫәлән, әлеге мәлдә 100 мең тирәһе аҡсам кешелә йөрөй. Берәүһе кире ҡайтара, берәүһе алып тора. Процентһыҙ кредит һымаҡ була инде был. Һәм быны мин ихлас күңелдән эшләйем.

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

*ҺАБАҠТАР*

# БУМЕРАНГ,

## йәки Йыһан законы эшләй

Туҡталышҡа ашығам. Төнө буйы яуған ҡырпаҡ ҡар тротуарға ярайһы ғына көрт һалырға өлгөргән. Шуға ла ни тиклем ҡабаланһам да, йүнле ыратып булмай. Ҡаршы яҡтан да оло йәштәге бер ағай, яҡынлашып килгән автобусҡа өлгөрөргә теләй, күрәһең, йүгерә-атлай килә. Ҡулындағы ауыр сумкаһы шәп атларға бирмәй. Икебеҙ бер юлы тигәндәй һуҡмаҡтар киҫешкән ергә килеп еттек. Дөрөҫөрәге мин алдараҡ өлгөрҙөм һәм уның юлын ҡыйып үттем. Шунда ҡапыл эске тойомлауым менән генә ағайҙың "Уф!" тигәнен ишеткәндәй булдым да, "Ҡатын-ҡыҙ юлды киҫһә, кире әйләнһәң дә була, барыбер юл уңмай", тигән юрау иҫемә төштө. Үҙем дә һиҙмәҫтән, ниндәй тиҙлек менән бараһам, шулай боролдом да, ағайҙы үҙемдән алға үткәреп ебәрҙем. Ул шундай йылы, матур итеп йылмайҙы. Ҡарашында рәхмәт тә, хөрмәт тойғоһо ла берҙәй сағылды.

Көнө буйы әлеге ҡылығым өсөн ҡыуанып йөрөнөм, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ...

Таныш булмаған ағай ҙа маршруткаға өлгөрҙө. Бер туҡталыштан һуң ул дәфтәр тулы сумка тотҡан уҡытыусы ҡыҙға үҙенең урынын бирҙе. Атаһы йәшендәге ир-егеттең хөрмәт күрһәтеүе йәш педагогта ла тик ыңғай хистәр генә уятты. Класҡа ингән һәр уҡыусыны ихлас ҡаршы алып, дәресен яҡшы үткәрәсәгенә шик юҡ. Уҡытыусыларының кәйефе балаларға ла күсер. Уларҙың күбеһе "дүртле", "бишле" билдәләре алып һөйөнөр. Эштән ҡайтҡанда автобуста миңә урын биреүсе ҡыуаныслы тойғо менән ҡайтып килгән ошо балаларҙың береһе булғандыр әле...

Бына шулай, был тормошта бөтәһе лә бер-береһенә бәйле. Шуға күрә, яҡындарыбыҙға ғына түгел, таныш түгел кешеләргә лә иғтибар күрһәтәйек, хөрмәт итәйек. Урамдамы, магазиндамы, дауаханаламы - бөтә ерҙә ҡулыбыҙҙан килгәнсә ярҙам итәйек, сөнки бумеранг, икенсе төрлө әйткәндә, Йыһан законы эшләй. Был ҡанундың асылы шунда: нимә бирәһең, шуны алаһың. Бында һүҙ матди әйбер хаҡында ғына бармай, ә күберәк энергия, көс тураһында. Әгәр һеҙ кемгәлер изгелек эшләһәгеҙ, ихлас ярҙам итһәгеҙ, бәхет, уңыш теләһәгеҙ, быларҙың бөтәһе лә мотлаҡ үҙегеҙгә әйләнеп ҡайта. Матди бүләк булып та килеүе мөмкин, ҡот, бәрәкәт сифатында ла күрерһегеҙ уны...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР ТУРАҺЫНДА

**Аллаһтың Рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тормошо бөтөн иманлыларҙан иманлы булыуы менән айырылып тора. Иман ҡеүәте һәм тәҡүәлек шул тиклем нығ, аҙ ғына шик тыуырҙай нәмәнән дә ул тыйылған. Бындай юғары сифатҡа эйә кешене хатта табыуы мөмкин дә түгел.**

### Иң юғары бейеклектәге иман

Бәйғәмбәр барлыҡ эш-ғәмәлен тик иман нигеҙендә ойошторған. Хаҡ Тәғәлә алдында тәҡүәлеге көслө булыу арҡаһында хатта ки йөрәге бына-бына туҡталырға әҙер торған; шул тиклем нескә күңелле һәм тәьҫирләнеүсән кеше, күҙенән йәш ҡойолмаған һәм бөтә тәне менән ҡалтыранмаған сағы ла бик һирәк булған. Тулҡынланған сағында ул - диңгеҙгә, тынлыҡта океанға бәрәбәр. Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) - иман, намыҫ, сафлыҡ, тәҡүәлек өлгөһө, эшмәкәрлегенең хаҡлығы шул тиклем бөйөк, бөрәү ҙә һәм бер нәмә лә уны яҙыҡ эшкә яҡын килтерә алмаған.

Тәҡүәлек, иман ҡеүәте Рәсүлдә иң юғары бейеклектә була. Бөтөн донъя уның ҡулында булған хәлдә лә Рәсүл быға бер арпа бөртөгө тапҡан ише генә ҡыуаныс кисерер була. Ҡапыл бар донъя ҡулынан ысҡынһа, быға ла ул ни бары бер арпа бөртөгөн юғалтҡан ише генә көйөр була. Фани донъяны йөрәге менән бына шулай ғына ҡабул итә. Ошолай ҡабул итеүе донъяны һис кенә лә кире ҡағыу булмай. Сөнки ул беҙгә был донъяла дөрөҫ йәшәүҙең иң хәйерле, иң аҡыллы юлдарын күрһәтте. Шуға ла был донъяны бөтөнләй инҡар итте тип уйлау дөрөҫ түгел, сөнки ул бит кешеләрҙе йәшәүгә, тормошҡа дәртләндерә. Бының асыҡ дәлиле: Аллаһ Рәсүле нигеҙләгән Ислам дәүләте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә донъялағы иң бай һәм иң ҡеүәтле дәүләткә әйләнә. Көнбайыштың бер фекер эйәһе әйтмешләй, һуңынан Аллаһ Рәсүле нигеҙләгән ошо бер дәүләттән үҙҙәренең бөйөклөгө менән империяларға тиң булған егерме биш яңы дәүләт барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, Бөйөк Осман империяһы шуларҙың береһе генә.

Аллаһ Рәсүле яҡты бәйғәмбәрлек юлына баҫкандан һуң да, бар донъя бөтә матурлығында һәм хозурлығында уның аяҡ аҫтына түшәлгәндә лә үҙенә бер тапҡыр ҙа хыянат итмәй. Был донъянан киткән сағында хатта тыуған саҡта мираҫ менән бирелгән мөлкәте лә булмай. Сөнки бөтә булған нәмәһен ул фәҡирҙәргә тарата. Вафатынан һуң ҡалған нәмәләргә иғтибар итегеҙ - бер нисә кәзә һәм ҡатындары йәшәгән бәләкәй генә бүлмәләр. Хатта ошо бүлмәләр ҙә йәмғиәттеке була. Ҡатындары вафатынан һуң бүлмәләр мәсеткә бирелә. Күреүселәр был бүлмәләрҙең мәсет мөйөшөндә бик бәләкәй генә урын биләгәнен һөйләй.

### Рәсүлдең иҙәндә һалам түшәктә йоҡлап йөрөгәне

Бер мәл Аллаһ Рәсүлен күрергә тип Ғүмәр хәҙрәт (р.ғ.) килә. Бәйғәмбәр үҙе йоҡлап йөрөгән һалам түшәктә ята, ә яңағында түшәктең һырҙары ҡалған. Бүлмәнең бер мөйөшөндә - эшкәртелгән тиреләр, икенсеһендә бер нисә ус арпа һалынған һауыт тора. Был хәлдә күргән Ғүмәр хәҙрәттең (р.ғ.) күҙенән йәше бәреп сыға. Аллаһ Рәсүле уның ни өсөн илауын һорай. Ғүмәр (р.ғ.) яуап бирә: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Был мәлдә хосрой (батша) һәм цезарь үҙҙәренең һарайҙарында мамыҡ яҫтыҡтарҙа йоҡлай, был донъя һинең өсөн яратылған булыуға ҡарамаҫтан, һин кипкән һалам түшәктә ятаһың, һалам яңағыңа һыр һалған. Шул хәлгә нисек иламайһың". Шул саҡта Аллаһ Рәсүле Ғүмәргә (р.ғ.) әйтә: "И Ғүмәр! Һин был донъя уларҙыҡы булыуын, ә беҙгә мәңгелек донъя насип булыуын теләмәйһеңме ни?" Икенсе хәҙистә яуабы шулайыраҡ яңғырай: "Был фани донъяла эшем юҡ. Мин ағас күләгәһенә килеп ултырған һәм тиҙҙән үҙ юлын дауам итергә тейешле юлсы бәрәбәрендәмен..."

Ул был донъяға рәсүллеген атҡарыр өсөн килә. Ул кешеләрҙең фекеренә һәм хис-тойғоларына тере һулыш өрә. Рәсүллеген үтәгәндән һуң, фанилыҡты ташлап китергә тейеш була. Был донъя менән бер нисек тә бәйләнмәгән кешенең ниндәйҙер шәһүәләргә, алдатҡыс-әүрәткестәргә ҡыҙығыуы бөтөнләй мөмкин булмаған хәл. Төп хәҡикәт шунда, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) бер ҡасан да фани донъяның шәһүәләренә алданмай, рәсүллегенән тайпылмай.

### Саҙаҡа мәсьәләһенә мөнәсәбәте

"Кис ятты, ләкин иртәнсәккә тиклем йоҡоға китә алманы, тулғанды, ауыр көрһөндө. Иртәнсәк ҡатыны һораны: "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Төнөн бик тынғыһыҙландығыҙ. Нимә һеҙҙе тынлыҡтан яҙҙырҙы?". Ә уның яуабы бына шулай: "Түшәк йәйгән саҡта бер хөрмә табып алғайным. Шуны ашаным. Аҙаҡ өйҙә саҙаҡаға һәм зәкәткә тигән хөрмә барлығы иҫемә килеп төштө. Әгәр ҙә шул хөрмәләрҙең береһен ҡапҡан булһам! Таң атҡансы ошо турала уйлап ғазапландым, шуға ла йоҡоға китә алманым".



Саҙаҡаға һәм зәкәткә тигән ризыҡ уның өсөн харам була. Ләкин был хөрмәнең уға бүләк итеп бирелеүе лә ихтимал бит. Шулай булыуына шик юҡ. Сөнки саҙаҡаға тигән ризыҡты бында төнгә тиклем ҡалдырмағандар, уларҙы килтереү менән шундуҡ таратырға ашыҡҡандар. Ауыҙға алған бер ризығы өсөн шундай хафа, икеләнеү аша ут йотҡан һәм бөтөн ғүмерен ошолай үткәргән кешенең ниндәйҙер яҙыҡлыҡҡа барыуы мөмкинме? Шөбһәләнеп, харам ҡылыуҙан ҡурҡып, унан һаҡланып йәшәгән, хатта аҙ ғына шик тыуҙырырҙай эш менән күңеленә күләгә төшөрмәгән. Бындай көслө ихтыяр гонаһҡа барамы? Юҡ, ул бер ҡасан да ҡыҙыҡтырғыстарға әүрәмәй, йәненә бер ниндәй ҙә харам эш, гонаһ өсөн юл күрһәтмәй. Уның рухы һәм ихтыяры һәр саҡ юғары дәрәжәлә саф, таҙа, пак була, ул шулай йәшәй һәм Хаҡ Тәғәлә янына ла шулай китә.

### Теге донъяға ҡарашы

Бер сәхәбә өйөндә Ҡөрьән уҡып ултыра. Тауышы урамдағыларға ла ишетелеп тора. Был мәлдә Аллаһ Рәсүле ошо өй тәңгәленән үтеп барған була. Ҡапыл уның төҫө ҡаса һәм ул тубыҡланып төшә. Гүйә, аяттар уны шулай ҡалтыранырға мәжбүр итә. Эйе, аяттың ҡаты иҫкәртеүе уға шулай көслө тәьҫир итә.

Аяттарҙа шулай тип әйтелә: "Беҙҙә бит - бығауҙар һәм йәһәннәм уты (яҙаларға), һәм шулай уҡ боғаҙҙарына тығылыр ризыҡ һәм ғазаплы яза бар" (Ҡөрьән, 73:12, 13).

Кемгә-кемгә, ә бит уға был һүҙҙәр өсөн хафаға ҡалырға түгел, сөнки ул - Аллаһтың Рәсүле. Ләкин Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) беҙгә Аллаһты ҡәҙерләү, таныу, хөрмәт итеү һәм Унан ҡурҡыуҙың һабағын бирә.

### Рәсүл бөтәһен дә Күреүсенең ҡаршыһында

Абдуллах ибн Масуд (р.ғ.) һөйләүенсә: "Бер мәл Рәсүл: "Һин Ҡөрьән уҡы, ә мин тыңлармын", - тине. Мин: "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Ҡөрьән бит һинең аша индерелде, уны мин нисек уҡыйым ти инде?" - тип һораным. Рәсүл шулай яуапланы: "Мин Ҡөрьәнде бүтәндәр уҡығанда тыңларға яратам". Мин "Ән-Ниса" сүрәһен уҡырға керештем. "Һәм Беҙ һәр өммәттән шаһит саҡырғанда һәм уларға ҡаршы һине (Эй, Мөхәммәт!) шаһит итеп саҡырғанда нимә булыр?" (Ҡөрьән, 4:41) тигән аятты уҡығандан һуң: "Булды, етте", -тигәнде ишеттем. Аллаһтың Рәсүленә табан боролдом, уның илағанын күрҙем, күҙ йәштәре йылға булып аға ине. Тәрән кисерештән йөрәге саҡ-саҡ ярылырҙай. Сөнки әлеге аят уға Хөкөм көнөнөң ҡот осҡос ваҡиғаһын бәйән итте".

**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Иман йәшлекте ҡайтара

Бына киң мәғлүмәт сараларының бер кемде лә битараф ҡалдырмаған миҫалдарынан бер нисәһе. 2013 йылда Огайо университеты докторы Донн Юнг шундай иҫ китерлек мәғлүмәттәр килтерә. Ғалим үҙенең штатындағы үлем күрһәткесе буйынса мәғлүмәт базаһына мөрәжәғәт итеп, 1989 - 2000 йылдар араһында яман шештән вафат булған 300 мең кешенең медицина картаһын анализлай. Нигеҙ итеп ул өс мөһим датаны - Раштыуаны, Рәхмәтле булыу көнөн (день Благодарения), пациенттың тыуған көнөн ала һәм ошо ваҡытта үлеүселәр һаны кәмемәгәнме икәнлеген ҡарай. Һөҙөмтә шаҡ ҡатырмай, шулай ҙа уйландыра: үлем сигендәге 4000 кешегә - бер проценттан ашыу - ниндәйҙер аңлатып булмаған сәбәптәр арҡаһында үлемде байрамдың икенсе көнөнә күсереү мөмкин була. Ғалим, тимәк, үлемдең барыбер ҙә ял көнө бар, тигән һығымта яһай.

Башҡа тикшеренеүҙәр 2010 йылда Даремда (АҠШ-тың Төньяҡ Каролина штаты) Герцог университетында һәм урындағы госпиталдә үткәрелә. Ғалимдар бер нисә монахты, шәфҡәт туташын һәм төрлө конфессияның дин әһелдәрен төрлө йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауыраған 700 сирле өсөн доға ҡылырға саҡыра. Бер нисә көн дауамында табиптар ауырыуҙарҙың хәле тураһында билдәләр ҡуйып бара, ә тәжрибә тамамланғас, мәғлүмәттәрҙе эксперттарға тапшыра. Тиҙҙән профессор Митчелл Крушофф һөҙөмтәләрҙе иғлан итә: доғалар ярҙамында 500 пациенттың һауығыу темпы яҡынса 93 процентҡа арта.

- Бының нимәнән килеп сыҡҡанын белмәйем, - ти профессор. - Әммә йөрәк эшмәкәрлегенә диндарҙарҙың да, сирлеләрҙең үҙҙәрененең дә иғтибар туплауы ыңғай йоғонто яһай. Уның өсөн доға ҡалғанда йәки кеше үҙе уҡығанда ул тулыһынса Илаһ менән аралашыуға иғтибар туплай, күрәһең, был организмдағы бик күп процестарҙы нормалләштереүгә килтерә һәм быны беҙгә өйрәнергә кәрәк.

Һуңынан доғаларҙың кеше организмында ғына түгел, һыуҙа ла зыянлы бактерияларҙы үлтереүе асыҡлана.

"Сәнәғәт һәм диңгеҙ медицинаһы ғилми-тикшеренеү институты"ның медик-биологик технологиялар лабораторияһынан Петербург инженер-электрофизигы, "Рәсәйҙең православие ғалимдары" Союзы ағзаһы Ангелика Малаховская тиҫтә йылдар фәнни булмаған күренештәрҙең үҙенсәлеген өйрәнә: крестное знамение көсөн, Аллаһ һүҙен һәм изге һыуҙың дауалау сифаттарын. Бына ул нимә ти:

